ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-5 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай)
2021
№5 (943)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы йылда ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыуығыҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Йәнәшәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында баҫмабыҙға яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, иҫкәртә күрегеҙ: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, уны марттан алдыра башлаясаҡтар. ПР905 индекслы баҫмабыҙ дүрт айға 483 һум 72 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Юлдарҙа ниҙәр көтә? 2



Оят һүҙҙәрҙе... лөғәттән алып ташлайыҡмы? 6



Башҡорт тарихы... тыуға, ташҡа соҡоп яҙылған... 8-9,11



Баш ҡаланың... милли рухиәт үҙәге 12-13



ТВ-программа 14

БЫЛ АЙҘА...

**Ҡыштың икенсе айы шаҡай ошоға тиклем үҙенең холҡо йәһәтенән ниндәй генә уҫал, ыжғыр, әсе һыуыҡтары менән иҫтә ҡалмаһын, быйыл барыбер икенсерәк ҡиәфәт алыр төҫлө. Быны раҫлау өсөн иң тәүҙә синоптиктар фаразына күҙ һалайыҡ. Рәсәй Гидрометүҙәк хеҙмәткәре Люмила Паршинаның "Российская газета"ға биргән интервьюһында, февралдә уртаса һауа температураһы минус 7,7 градус тәшкил итәсәк, һалҡынайтҡан хәлдә лә термометр бағанаһы көндөҙ минус 15, төндә 20 градустан түбән төшмәйәсәк, тип вәғәҙәләнә.**



# ШАҠАЙ ҘА ШАҠ ҠАТЫРЫРМЫ?

Бер яҡтан, был, ғөмүмән, быйылғы ҡыштың йылы килеүе менән аңлатылһа, икенсенән, шаҡайҙың ҡыш менән яҙ араһын тоташтырыусы ай икәнен дә онотмайыҡ. Шуға ла унын һуңғы көнө календарҙа Ҡыштың китеү көнө **(28)** тип нарыҡланған. Ай аҙағында уртаса һауа температураһы минус 5 градусҡа тиклем күтәрелеүенә ғәжәпләнмәҫкә лә була. Әммә ләкин сәйәсәт, иҡтисад һәм медицина белгестәре күҙлегенән ҡыштың һуңғы айы күңелгә бер ҙә йылылыҡ өҫтәмәй. Уларҙың фараздарынса, февраль ауыр ай буласаҡ. Мәҫәлән, хаҡтар мәсьәләһен генә алып ҡарағанда ла асыҡ күренә был. Аҙыҡ-түлек, башҡа тауарҙарға, хеҙмәттәргә көн дә арта барған хаҡтарҙы нисек кенә ауыҙлыҡларға тырышып ҡарамаһындар, ул барыбер тик тороп сыҙамай, сығынлаппмы-сығынлай. Был айҙа ғына күҙәтмәбеҙ, ахыры, яңынан-яңы хаҡтарҙы. Теге йыл "йомарт" мираҫ ҡалдырҙы бит. Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙе генә алайыҡ, булмаһа. Халыҡтың асыуын ҡабартып, нәфрәтен уятҡан әлеге БашРТС ойошмаһы быйыл да яңы йыл "бүләкһеҙ" ҡалдырманы беҙҙе: тос, һимеҙ генә һандарҙан торған квитанциялар үҙенсәлекле ҡотлау открыткалары урынына байрамыбыҙҙың мәлендә-сәғәтендә, һуңламай ғына почта йәшниктәребеҙгә килеп тә етте. Һауа температураһы түбәнерәк төшкән һайын, йылылыҡҡа хаҡтар күтәрелә бара, тип аңлата улар әлеге фантастик һандарҙың "серен". Ҡыҙыҡ, ә синоптиктар әле тап ҡыштың йылдағынан күпкә йылыраҡ килеүе хаҡында һөйләй. Ә БашРТС квитанцияларындағы һандар түбән температура менән юғары хаҡтар араһындағы пропорцияны тупаҫ рәүештә емерә генә икәнен күрәбеҙ. БР Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы Вадим Беляков әйтеүенсә, декабргә генә түгел, хатта ноябргә йылылыҡ өсөн 200-300 процентҡа артыҡ түләү һалынған квитанциялар ебәрәләр уларҙың ойошмаһына.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## балаларҙы бәйгегә дәртләндерҙе

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада йыл да баш ҡалабыҙ Өфөгә телһөйәр, илһөйәр балаларҙы йыйған күркәм сараларҙың береһе. Илдәге эпидемиологик хәлгә бәйле онлайн форматта ойошторолоуға ҡарамаҫтан, быйыл унда ҡатнашыусылар һаны тағы ла күберәк - йәмғеһе 734 уҡыусы булды. "Туған тел донъяһы" YouTube каналында олимпиадаға йомғаҡ яһалды.**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада, ғәҙәттәгесә, өс йүнәлештә ойошторолдо. Башҡорт милли мәктәптәрендә башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыған 187 уҡыусы, уҡытыу рус телендә алып барылған белем усаҡтарында башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыған 169 уҡыусы ҡатнашты. Быйыл 8-ҙән алып 11-се синыфҡа тиклем ҡатнашыу мөмкинлеге бирелгәс, уҡыусылар һаны бермә-бер артҡан. Әлбиттә, былтырҙан алып олимпиада еңеүселәре һәм призерҙарына Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына ингәндә Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләренә балл өҫтәлеүе лә дәртләндергәндер уларҙы.

**(Дауамы 2-се биттә).**




*Баймаҡ районынан Азалия Нарынбаева - еңеүсе.*

12+

***✓ Иҫерек килеш руль артына ултырырға баҙнат иткәндәрҙең машинаһын тартып алырға кәрәк тигән тәкдим индерелдә. Бик шәп булыр ине! Ә әлегә Рәсәй закон сығарыусылары бары тик штрафтар һанын арттырыу менән мауыға.***



*БЫНАҒАЙЫШ!*

**Юл-хәрәкәт һәләкәте бөгөнгө көндә коронавирус афәтенән кәм булмаған күләмдә ҡорбандар килтереүсе "автопандемия"ға әйерелде. Ул фажиғәләр көндән-көн аяныслыраҡ төҫ ала бара, автоһәләкәттәр юлаусыларҙы бер юлы күпләп, хатта бөтөн ғаиләләре менән алып китә башланы.**

# ЮЛДАРҘА НИҘӘР КӨТӘ?

Мәҫәлән, ошо көндәрҙә генә Һамар - Өфө - Силәбе автотрассаһының Башҡортостан биләмәһендә енел автомобиль менән Мерседес йөк автомобиле йөҙгә-йөҙ бәрелешеп, Volkswagen Polo автомобиле рулендә килгән ҡатын һәм уның ике балаһы менән ире һәләк булғандар.13 ғинуарҙа Өфө - Яңауыл трассаһының Бөрө районы биләмәһендә бер автомобиль тайғаҡ юлдан ситкә тәкмәсләй һәм баштүбән әйләнеп барып төшә. Бәхеткә, ундағы юлаусылар иҫән ҡала. Ғинуар башынан алып ни бары ике аҙна эсендә генә лә республикала барлығы 76 юл-транспорт ваҡиғаһы булып, унда 13 кешенең ғүмере өҙөлә, 50-нән ашыу юлаусы тән йәрәхәттәре ала. Бер яҡтан, был һауа һәм юлдар торошо менән аңлатылһа, икенсе яҡтан, кеше факторына бәйле: водителдәрҙә иғтибарлылыҡ һәм тиҙлеккә контролдең булмауы.

Баш ҡалабыҙ Өфөлә лә йәйәүлегә аҙым һайын хәүеф янай. Өфө урамдарында былтыр булған һәм бер-береһенә оҡшаш ике юл-транспорт ваҡиғаһын алайыҡ. Тәүгеһендә 20 йәшлек кенә ҡыҙ үҙенең текә Тойотаһында рөхсәт ителгән урында юл аша үтеп барған ауырлы ҡатынды һәм уның 6 йәшлек ҡыҙын бәрҙерә. Бәхеткә, улар иҫән ҡала, ләкин ҡатын тыумаған балаһын юғалта, ә ҡыҙы ауыр йәрәхәттәр ала. Тағы бер һауалы водитель - 39 йәшлек ханым Менделеев урамы тыҡрығында йәшел утка үтеп барған 13 йәшлек уҡыусы ҡыҙҙы бәрҙерә. Быпдай күнелһеҙ хәбәрҙәр көндәлек яңылыҡтар шәлкеменең "традицион" өлөшөнә әүерелде. Әйткәндәй, күп һанлы күҙәтеүҙәр һәм һынауҙарҙан сығып әйтергә була: баш ҡалабыҙҙың ҡатын-ҡыҙ водителдәре ана шулай юл бирергә, кәтеп торорға һис яратмай беҙҙә. Хәҙер хатта светофорҙың йәшел утына ла, махсус рөхсәт билдәһе һалынған урындарҙан үтеү ҙә хәүефле, сөнки руль артындағылар ҡайҙалыр бик ашыға - төрмә тарафына, күрәһең. Ләкин кеше тапатып та уның үлеменә сәбәпсе булған хәлдә лә беҙҙә төрмәгә бик ултырта һалып та бармайҙар: закон бигерәк кешелекле, әллә башка беҙ белмәгән сәбәптәр бар... Уның ҡарауы, Өфө водителдәренә кешелеклелек, тәрбиә етенкерәмәй, уларҙың күбеһе йәйәүлегә ҡарата ихтирамды түбәнселеккә иҫәпләй. Ә иҫерек водителдәр хаҡында шунан ни әйтәһең? Улар биш тапҡырға агрессивыраҡ һәм хәүефлерәк. Бихисап саралар күрелеүгә, закондар ҡабул ителеүгә ҡарамаҫтан, Рәсәйҙә юл һәләкәттәрендә үлем осрактары кәмемәй. Әйтеүҙәренсә, был күрһәткес беҙҙә Европа илдәренә ҡарағанда 3-4 тапҡырға күберәк тә хатта. Кеше факторы, тигәндән, юл-транспорт ваҡиғаларының 85 проценты водителдәрҙең юл ҡағиҙәләрен боҙоуы арҡаһында яһала.



Ошо мәсьәләләрҙе анализлаусы эксперттар фекеренсә, иң күп ҡорбандар килтереүсе һәләкәт урындары тип ҡалаларҙа тыҡрыҡ боролоштары, йәйәүлеләр өсөн юл аша сыға торған урындар; трассаларҙа иһә машиналарҙың төрлө сәбәптәр менән ҡаршы һыҙатҡа килеп сығыуы иҫәпләнә. Һәм был осраҡтарҙың бөтәһендә лә кеше факторы - водитель һәм йәйәүле ғәйепле булып сыға. Ләкин барыбер руль артындағыларҙан күберәк һорала, аныҡлабыраҡ әйткәндә, иғтибарлылыҡ, тиҙлекте кәметеү йәһәтенән, мәҫәлән, тип һығымта яһай эксперттар, бик күп авария мәленән төшөрөлгән видеороликтарҙы анализлағандан һуң. Тимәк, водителдәр менән күберәк эшләргә, быныҡ өсөн ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәрен, психологтарҙы йәлеп итергә, кәрәк икән, имтихан, зачет тәртибен индерергә кәрәктер. Ниҙәр генә эшләнһә лә водителдәргә уларҙың руль артына ултырыуы ҙур яуаплылыҡ һәм потенциаль хәүеф сығанағы икәнен аңдарына һендереү кәрәк. Шуныһыҙ аҙым һайын камералар ҡуйыуҙың да файҙаһы булмаясаҡ. Хатта бит ҙур ғына штраф күләмдәре лә, ҡайһы берәүҙәрҙе транспорт сараһы йөртөү хоҡуғынан һәм хатта иркенән мәхрүм итеү ҙә башҡалар өсөн һабаҡ булып етмәй.

Ахыр сиктә, Башҡортостан Башлығы Р.Хәбиров былтыр йыл аҙағында юл һәләкәттәрен кәметеү маҡсатында "кардиналь" сара күреү хаҡында юкҡа ғына һүҙ ҡуҙғатманы. Тәү сиратта был иҫерек водителдәргә ҡағыла. Иҫерек килеш руль артына ултырырға баҙнат иткәндәрҙең машинаһын тартып алырға кәрәк тигән тәкдим индереләлдә. Бик шәп булыр ине лә һуң! Ә әлегә Рәсәй закон сығарыусылары бары тик штрафтар һанын арттырыу менән мауыға. Йыл башланып ҡына тороуға ҡарамаҫтан, был өлкәлә яңы штраф санкциялары теҙмәһе барлыҡҡа килә лә башланы. Уларҙың ҡайнылары юлтранспорт хәлдәрен яйлауға ҡағылмаһа ла тәртипкә саҡыра: тыйылған урындарҙа машиналарын йыуған өсөн 2 мең һумға тиклем, ә эшлектән сыҡкан, боҙолған машиналарҙы ҡайҙа етте, шунда ташлап ҡалдырған өсөн 1-3 мең һум күләмендә, газонда (1,5-4 мең), балалар майҙансыҡтарында машина ҡуйған өсөн 2-5 мең һум күләмендә штраф түләтеү ҡарала. Быйыл шулай уҡ, Рәсәй Хөкүмәте вәғәҙәләүенсә, бөтә урындарҙа ла водителдәрҙе уңға йә һулға боролоштарҙа йәйәүләләр юлы киҫелеше хаҡында иҫкәртеүсе яңы светофорҙар ҡуйыласаҡ, тиҙәр. РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының "Водителдәргә мотлаҡ медицина тикшереүе үткәреү" хаҡында бойороғо нигеҙендә, әгәр нарколог теге йә был водителдә наркомания һәм алкоголизм билдәләре бар тип тапкан хәлдә әлеге кеше махсус анализ тапшырырға бурыслы буласаҡ. Шулай уҡ дәрөҫлөгөн раҫлау өсөн видеокамера күҙәтеүендә техосмотр үтеү һәм машина йөртөүгә хоҡуҡ биреүсе таныҡлыҡ өсөн яңы имтихан ҡағиҙәләре индереләүен дә өҫтәргә кәрәк. Быйыл шулай уҡ юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә лә үҙгәрештәр индереләсәк, тип көтөлә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## балаларҙы бәйгегә дәртләндерҙе

**(Башы 1-се биттә).**

Шулай итеп, милли мәктәптәрҙә уҡығандар араһында Баймаҡ районы Билал ауылы мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы Азалия Нарынбаева, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы Илүзә Янбаева һәм 8-се синыф уҡыусыһы Ирхан Хисаметдинов, Баймаҡ ҡалаһы 4-се лицейының 9-сы синыф уҡыусыһы Йәнгүзәл Зәйнуллина еңеүселәр тип табылды. Ә бына уҡыуы рус телендә алып барылған белем усаҡтарында туған телен яратып өйрәнгән балаларҙан Хәйбулла районы Сиҙәм ауыл мәктәбенән Мәҙинә Рамаҙанова һәм Сибай ҡалаһының "Ирәндек" лицейынан Айзилә Мостафина икеһе лә 11-се синыфтар араһында бер тигеҙ балл йыйып, еңеүсе булды. Һәм тағы: Өфөләге 162-се күп профилле полилингваль "Смарт" мәктәбендәге башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән эшмәкәрлек тәүге емешен бирҙе: 8-се синыф уҡыусыһы Лиана Ҡарабаева тиҫтерҙәрен уҙып, еңеү яуланы.

Быйыл ойоштороусылар олимпиада шарттарына тағы ла бер үҙгәреш индергән: башҡорт телен дәүләт теле буларак уҡығандар өсөн ярыш эштәре ике категорияла - башлап һәм дауам итеп өйрәнеүселәргә айырым төҙөлгән, еңеүселәр ҙә айырым билдәләнгән. Шарттарҙың нәҡ ошо үҙенсәлеге республика мәктәптәрендә уҡыған төрлө милләт вәкилдәрен күпләп йәлеп итергә мөмкинлек биргән һәм 352 уҡыусы белем кимәлен һынап ҡараған. Телде башлап өйрәнеүселәрҙән Өфө ҡалаһы Р. Бикбаев исемендәге 102-се башҡорт гимназияһынан Алина Пермякова, дауам итеүселәрҙән Борай районы Ҡайынлыҡ ауыл мәктәбенән Әҙилә Шакирова 11-се синыфтар араһында еңеүселәр тип табылған. Шулай уҡ 8-10-сы синыфтарҙан да яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән уҡыусылар бар, улар күпселек Өфө ҡалаһы һәм районы белем усаҡтарынан, Сибай һәм Стәрлетамаҡтан.

Олимпиадаға төбәк-ара статус биреүселәр, Рәсәйҙең башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәренән булған милләттәштәр быйыл да һынатмаған. Бәйгелә Силәбе, Ҡурған, Ырымбур, Һа-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Ауыл уҡытыусыһы" программаһы 2021 йылда ла ғәмәлдә буласаҡ. Ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусылар, шулай уҡ 55 йәшкә тиклемге педагогтар программа сиктәрендә бер миллион һум күләмендә компенсацияға дәғүә итә ала. Программа балалар баҡсалары тәрбиәселәренә, башҡа педагогик хеҙмәткәрҙәргә ҡағылмай. Төп шарт - ауыл ерендә, ҡала тибындағы ҡасабала йәки 50 меңдән аҙыраҡ кеше йәшәгән ҡалала урынлашкан мәктәптә 5 йыл эшләү. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар һәм документтар 15 апрелгә тиклем ҡабул ителә.

✓Башҡортостанда судтар 92 кешегә сит илдән ҡайтҡандан һуң Дәүләт хеҙмәттәре сайтында коронавирусҡа тест һөҙөмтәләрен урынлаштырмаған өсөн штраф һалған. Штрафтарҙың дөйөм суммаһы - 720 мең һумдан ашыу, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың республика идаралығы. Ведомствола белдереүҙәренсә, сит илдән ҡайтҡас, өс көн эсендә лабораторияла ПЦР ысулы менән COVID-19-ға анализ бирергә, уның һөҙөмтәһен Дәүләт хеҙмәттәре порталында баҫтырып сығарырға кәрәк.

✓Быйыл 1 ғинуарҙан Рәсәйҙә ситтән тороп эшләүҙе көйләү буйынса Хеҙмәт кодексына үҙгәрештәр индереү буйынса Закон үҙ көсөнә инде. Уға ярашлы, эш биреүсе айырым осраҡтарҙа хеҙмәткәрҙәренә ситтән тороп эшләү тәртибен ҡуллана ала. Хеҙмәт килешеүендә был хеҙмәткәрҙең үҙенең бурыстарын даими нигеҙҙә йә ваҡытлыса ситтән тороп үтәүе, шулай уҡ күпмелер ваҡыт ситтән, күпмелер ваҡыт үҙенең эш урынында ултырып эшләүе билдәләнә.

✓Башҡортостан Башлығы республикала йәшәүселәрҙе коронавирустан прививка яһатыуҙы оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа саҡырҙы, шулай уҡ уны үҙендә тикшереп ҡарауын һәм үҙен яҡшы тойоуын билдәләне. "Әле уҡ Дәүләт хеҙмәттәре сайтында вакцинацияға яҙылырға мөмкин һәм кәрәк. Күпселегебеҙҙә иммунитет ни тиклем тиҙерәк барлыҡҡа килһә, республика шул тиклем тиҙерәк "коллектив иммунитет"ҡа ирешер. Шул саҡта беҙ ғәҙәти тормошҡа кире ҡайтырбыҙ. Иҡтисадтағы юғалтыуҙарҙы ҡапларбыҙ һәм элекке һөҙөмтәләрҙе уҙып китербеҙ", - тине республика етәксеһе.

✓ *Бөгөн олимпиада 35-се тапҡыр үтә һәм унда 700-ҙән ашыу бала ҡатнаша. Ул 2019 йылдан Бөтә Рәсәй олимпиадалар исемлегенә индерелде, республика вуздары еңеүселәрҙең Берҙәм дәүләт имтиханына өҫтәмә балл билдәләй.*



БЫЛ АЙҘА...

# ШАҠАЙ ҘА ШАҠ ҠАТЫРЫРМЫ?



**(Башы 1-се биттә).**

Артабан да шаҡ ҡатырырмы икән беҙҙе шаҡай? Өҫөнсө йыл дауам иткән был самаһыҙлыҡҡа сик ҡуйыусы юҡ. Эш тарифта түгел, ә түләүҙәрҙе хисаплауҙа манипуляциялар гәйепле, ти ул. Ошо араларҙа сүп-сарҙы ла "алтын"ға әйләндерергә йыйыналар икән, тип ишетелде. Башҡа ресурс хужалары ла ҡалышырға теләмәҫ, әлбиттә: быйыл коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡтарҙы тағы ла 3,8 процентҡа арттырыу ҡарала. Шуныһы ҡыҙыҡ: квартплатанды түләр өсөн... тағы өҫтәп түләргә кәрәк. Почта бүлексәләре, һаҡлыҡ банкы кассалары быны күптән ғәмәлгә индерһә, хәҙер килеп, хатта "Сбербанк онлайн","Мобильный банк","Автоплатеж" буйынса ла комиссия түләтелә башлаясаҡ. Әйткәндәй, коронавирус менән бәйле тиҙҙән мобиль элемтә хеҙмәте өсөн дә хаҡ 15-16 процентҡа артасаҡ...

Социаль-иҡтисади мәсьәләләр өлкәһендә, шулай итеп, ыңғай йүнәлеш көтөлмәһә лә, уның ҡарауы, табиптар ғына түгел, күрәҙәселәр һәм астрологтар фекеренсә лә ошо айҙан һуң ковид һәм уның эйәрсәндәре сигенә башлаясаҡ, имеш. Исмаһам, ошоноһо иш килһәсе! Быйылғылай февралдең бик һирәк килеүе тураһында яҙалар. Шаҡайҙың ҡәҙимгә график һүрәтләнештә бирелә торған календарына күҙ һалһағыҙ, уның 4 дүшәмбе, 4 шишәмбе, 4 шаршамбы, 4 кесаҙна, 4 йома һәм 4-әр шәмбе менән йәкшәмбенән тороп, тура дүртмөйөш рәүешендә һүрәтләнешен күрербеҙ. "Идеальный брусок без сучка и задоринки" тип һоҡланыуын белдерә ҡайһы берәүҙәр интернет сығанаҡтарҙа. Тормошобоҙ ҙа ана шулай бөтөн, теүәл, "ботаҡ-сатаҡһыҙ" булһын ине, тип теләйек әйҙә. Батып барған һаламға йәбешер, тип көләүселәр ҙә булыр, тик бөтөн нәмә лә уға нисек, ҡайһы яҡтан тороп ҡарауға ла бәйле бит. Беҙ ҙә шаҡайҙың ошо бәләкәй генә ҡыҙыҡлы үҙенсәлеген яҡшыға юрайыҡ әле: киләсәк ни күрһәтер...

Ай календарында элекке тыныс көндәрҙе хәтерләтеп, ҡәҙимгә ваҡиғалар теҙмәһе бирелә, уларға инде күҙ ҙә өйрәнеп киткән. Ә бына ошо осорҙағы һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә арналған даталар иғтибарҙы йәлеп итә шулай ҙа: Ҡатын-ҡыҙ табиптар көнө **(3)**, Бөтөн донъя яман шешкә ҡаршы көрәш **(4)**, Халыҡ-ара стоматолог **(9)**, Бөтөн донъя сирлеләр **(11)**, Фельдшер **(21)** көндәре билдәләнә. Илдәге табиптарҙың 71 проценттан ашыуырағы - ҡатын-ҡыҙ. Һуңғы йылдарҙа ғына республикабыҙҙа бик күп фельдшер-акушер пункттары (ФАП) асылды. Ауылдарҙа эшләүселәр ҙә нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар. Улар араһында оҙаҡ йылдар үҙҙәрен ошо тынғыһыҙ һөнәргә бағышлаған һәм тәжрибәһе яғынан квалификациялы табиптарға тиңләшерлектәре байтаҡ. Ауылда эшләүе еңел түгел, ана бит, миллиондарға ҡыҙыҡтырып та йәлеп итеп булмай табиптарҙы бында. Аҡсаға ҡыҙыҡып килгәндәренең дә күптәре тейешле мөҙҙәтен еткерә лә тиҙерәк тайыу яғын ҡарай. Ауылда төпләкләнеп, үҙ ғүмерен ауылдаштары һаулығын һаҡлауға бағышлаған фельдшерҙар ихтирамға ғына түгел, иғтибарға ла лайыҡ: иң тәүҙә уларҙың эш хаҡын арттырыу, һәр төрлө ташламалар булдырыу, хатта транспорт менән тәьмин итеү кәрәк. Уйлап ҡараһаң, улар ҙа бит донъя көтә, ғаиләһен аҫрай, балалар үҫтерә... Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар көнө-төнө - эштә: тәүлектең теләһә ниндәй мәлендә бер нигә ҡарап тормаҫтан, ауырыуға ярҙамға йә бәлә-ҡаза урынына килеп етергә әҙерлек хәлендә йәшәйҙәр. Ниндәй генә ауыр осраҡта ла һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға, юғалып ҡалмаҫҡа күнеккәндәр. Кәрәк икән, ауырыуҙы ауыл-ара соҡор-саҡырлы юлдарҙан район дауаханаһына тиклем оҙатып барырға ла тура килә уларға. Ғөмүмән, ауыл фельдшерҙары хаҡында туҡтауһыҙ һөйләргә, хатта мәҡәлә генә түгел, әҙәби әҫәрҙәр яҙырға ла булыр ине. Һәр хәлдә, ил етәкселеге туҡтауһыҙ һүҙ алып барған һәм бының өсөн 550 млрд һум аҡса бүленгән һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел, тәүге звеноһы реформаһы ауыл фельдшерҙары хәлендә лә реаль сағылырға тейештер.

Был айҙа тағы ла Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Сталинград һуғышында совет ғәскәрҙәре тарафынан немец фашистарын тар-мар иткән көн **(2)**, Рәсәй фәне **(8)**, Граждандар авиацияһы хеҙмәткәре **(9)**, Аҡ үгеҙ символлы көнсығышса Яңы йыл **(12)**, Бөтөн донъя радио **(13)**, Ғашиҡтар, Бөтөн донъя компьютерсы һәм Халыҡ-ара китап бүләк итеү көндәре **(14)**, Ватан сиктәренән ситтә хәрби бурыстарын үтәгән рәсәйҙәрҙе (интернационалист һуғышсылар) иҫкә алыу **(15)**, Изгелек эшләү **(17)**, РФ транспорт полицияһы, мосолман байрамы Рәғәиб кисе **(18)**, Орнитолог, Киттар көндәре **(19)**, Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек **(20)**, Халыҡ-ара туған телдәр **(21)**, Ватанды һаҡлаусылар көнө **(23)**, БР дәүләт флагы көнө **(25, 1992)**, Аҡ айыуҙар көнө **(27)**.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**4 -** кинорежиссер, РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, "Салауат Юлаев" тарихи фильмын ҡуйыусы автор **Яков Протазановтың тыуыуына - 140 йыл** (1881-1945).

**7 -** фольклорсы, филология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәктең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Фәнүзә Нәҙершинаға - 85 йәш** (1936).

**18 -** йырсы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, 1972-1983 йылдарҙа Өфө дәүләт сәнғәт училищеһы уҡытыусыһы, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Флүрә Ноғомановаға - 85 йәш** (1936).

**20 -** дәүләт эшмәкәре, комбриг, БАССР хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары, 1920-1922 йылдарҙа Башҡортостан Башҡарма комитеты рәйесе, өс Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры **Муса Мортазиндың тыуыуына - 130 йыл** (1891-1937).

**21 -** шағир, 1971-1986 йылдарҙа "Башҡортостан пионеры" гәзите мөхәррире, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Г.Х.Андерсен исемендәге халыҡ-ара диплом лауреаты **Сафуан Әлибаевтың тыуыуына - 80 йыл** (1941-2014).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

мар өлкәләренән, Пермь крайы һәм Татарстандан барлығы 26 уҡыусы ҡатнашҡан. Улар араһында Пермь крайы Ғ. Туҡай исемендәге Барҙа гимназияһы Башҡорт йәкшәмбе мәктәбенең 8-се синыф уҡыусыһы Арина Тлитова, Ырымбур өлкәһе Новосергиевка районы Ҡотош мәктәбенең 9-сы синыф уҡыусыһы Эльвина Ишназарова, Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Яраткол мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Айлина Шәмсетдинова һәм Мәтәл мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы Данияр Зарипов еңеү яуланы.

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиада 1986 йылда республиканың Мәғариф министрлығы һәм Башҡорт дәүләт университеты тарафынан тәүге тапҡыр уҙғарыла, - тине БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева. - Ул осорҙа ҡатнашыусылар һаны ла, бәлки, күп булмағандыр. Бөгөн олимпиада 35-се тапҡыр үтә һәм унда 700-ҙән ашыу бала ҡатнаша. Олимпиада 2019 йылдан Бөтә Рәсәй олимпиадалар һәм конкурстар исемлегенә индерелде, 2020 йылдан республика вуздары еңеүселәрҙең Берҙәм дәүләт имтиханына өҫтәмә балл билдәләй. Былтыр 80 еңеүсе һәм призер, уларҙы әҙерләгән уҡытыусылар Башҡортостан Башлығы премияһына лайыҡ булды. Был да балаларҙың башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныуын арттырырға, улар менән эшләгән педагогтарҙың күнелен үҫтерергә булышлыҡ итте.

Министр урынбаҫары әйтеүенсә, был юлы йылдан-йыл иң яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән 10 мәктәп һәм уларҙа фиҙаҡәр хеҙмәт иткән 15 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мәғариф министрлығының рәхмәт хаттары менән бүләкләнәсәк. Был белем усаҡтары исемлегендә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты, Ишембайҙың Ә.З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназияһы, Сибайҙың "Ирәндек" лицейы, Баймаҡтың 4-се лицейы, Күгәрсен районының Башҡорт гимназияһы, Ғафури районының Н. Мәжитов исемендәге Башҡорт гимназия-интернаты, Ейәнсура районының Башҡорт гимназия-интернаты, Дүртөйлө ҡалаһының Н. Нәжми исемендәге Башҡорт гимназияһы, Өфө ҡалаһының М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы һәм Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиада был юлы балаларыбыҙҙың туған телен яратып өйрәнеүҙәрен генә түгел, ә иң мөһиме, республикабыҙҙы төбәк иткән төрлө милләт вәкилдәренең телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә ҡарата ихтирамын сағылдырҙы.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров дүртенсегә атай булды. Уның һәм ҡатыны Каринәнең 26 ғинуар иртәһендә улы тыуҙы. Сабыйға Тимер тип исем ҡушасаҡтар. Яңы тыуған сабый - 56 йәшлек Радий Хәбировтың дүртенсе балаһы. "Бөгөн әсәйемә 88 йәш тулыр ине, һәм тап бөгөн Каринам миңә ул бүләк итте! Уның ҙур етәксе булыуын теләмәйем. Иң мөһиме, бәхетле булһын",- тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Иң яҡшы "Башҡорт ырыуҙары ташы" мемориаль комплексын төҙөү өсөн конкурс иғлан ителде. Ул Башҡортостан Республикаһының Ишембай районындағы Торатау итәгендә буласаҡ. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн ғаризалар, проекттар, аңлатмалы яҙыуҙар, график материалдар һәм смета-финанс иҫәп-хисабы 2021 йылдың 27 апреленә тиклем "Рәсәй рәссамдар союзы"ның Башҡортостан Республикаһы төбәк бүлексәһендә ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 148. Тел. 8 (347) 284-42-47.

✓Айрат Сәйетгәлин Архангел районы башлығы итеп тәғәйенләнде. Бынан алда район башлығы Илшат Әминевтың вәкәләттәрен ваҡытынан алда һалыуы хаҡында хәбәр ителгәйне. Чиновниктың үҙ теләге буйынса отставкаһы советтың сираттан тыш ултырышында ҡабул ителде. Ул район менән 2019 йылдың июненән башлап етәкселек итте. Билдәле булыуынса, яңы муниципалитет башлығына 39 йәш. Бығаса тиклем Айрат Сәйетгәлин Ҡырмыҫҡалы районы советы секретары булып эшләне.

✓Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығында ата-әсәләрҙән балаларҙы беренсе класҡа алыу өсөн ғаризалар ҡабул итеүҙең яңы срогы тураһында иҫкә төшөрҙөләр. Мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итеүенсә, мәктәпкә беркетелгән биләмәлә йәшәгән, шулай уҡ беренсе класҡа уҡырға алыныу өҫтөнлөгөнә эйә булған балалар өсөн ҡабул итеү кампаниялары 1 апрелдә башлана һәм 30 июнгә тиклем дауам итә. Мәктәпкә беркетелгән биләмәлә йәшәмәгән балаларҙы буш урындарға ҡабул итеү 6 июлдән 5 сентябргә хәтлем ойошторола.

*МӨРӘЖӘҒӘТНАМӘ*

# БЕҘ БАРЫҺЫН ДА БУЛДЫРЫРБЫҘ!

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны.**

"Бөгөн мин еңел булмаған 2020 йылда республиканың нисек йәшәүенә йомғаҡ яһайым, һеҙҙең менән артабан ниндәй йүнәлештә хәрәкәт итәсәгебеҙ тураһында уйҙарым менән бүлешәм. Быйыл беҙ иҡтисадты нығытасаҡбыҙ, социаль бурыстарҙы хәл итәсәкбеҙ, артабанғы үҫеш өсөн яңы "үҫеш нөктәләрен" табасаҡбыҙ", - тип белдерҙе сығышының башында уҡ Радий Фәрит улы. Шулай уҡ ул уҙған йылда алғы сафта булған медицина хеҙмәткәрҙәренә, уҡытыусыларға, ирекмәндәргә, төҙөүселәргә, шул иҫәптән төрлө сикләүҙәрҙе аңлап ҡабул иткән республика халҡына, ил Президенты Владимир Путинға республикаға, иҡтисадҡа һәм социаль өлкәгә федераль бюджеттан ваҡытында һөҙөмтәле ярҙам күрһәтеүе өсөн рәхмәт белдерҙе.

● Радий Фәрит улы билдәләүенсә, йыл ҡатмарлы булыуға ҡарамаҫтан, республика иҡтисадтың түбән тәгәрәүенә юл ҡуймаған, йылды сәнәғәт производствоһы индексын йөҙ процент менән тигәндәй япҡан. Милли инвестиция рейтингында Башҡортостан ил буйынса 16-сы урындан 9-сы урынға күтәрелеп, иң яҡшы субъекттар иҫәбенә инә. Урындағы предприятиелар: УМПО, "Башнефть", "Газпром нефтехим Салауат", Салауат катализаторҙар заводы инвестиция программаларын тормошҡа ашырыуын дауам иткән. Башҡа тармаҡтар ҙа инвестиция әйләнешен төшөрмәй.

Биш моноҡала - уҙышлы үҫеш территорияларының (ТОР) 74 резиденты 4 миллиард инвестиция һалған, һөҙөмтәлә 3 мең яңы эш урыны барлыҡҡа килгән. Республика "Газпром", "Роснефть", "Ростех" менән яңыса бәйләнештәр булдырған, улар менән берлектә эш төркөмдәре төҙөгән. Шул уҡ ваҡытта 50 меңдән ашыу эшҡыуарға ярҙам күрһәтелгән, өҫтәмә һалым льготалары, бизнесҡа милек һәм финанс йәһәтенән ярҙам күрһәтеү механизмы индерелгән.

"Үҫеш Хөкүмәте булараҡ, беҙ алға киткән йүнәлештәргә иҫәп тоттоҡ һәм федераль кимәлдә етди уңыштарға өлгәштек, - тине Радий Хәбиров. - Ил Хөкүмәте беҙҙең Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат индустриаль ұҙәктәре базаһында "Алға" сәнәғәт тибындағы айырым иҡтисади зона булдырыу инициативаһын хупланы. Беҙҙең биш ТОР-ға уникаль ҡеүәтле майҙансыҡ өҫтәлде, унда һәр инвестор тиҙ арала юғары килемле бизнес төҙөй ала. Унда хәҙер эштәр ҡайнай, резиденттар майҙансыҡты үҙләштерә. Быйыл - 800, киләсәктә тағы 2 мең самаһы яңы эш урыны буласаҡ. Шуға күрә, инвесторҙарҙың беҙҙең иҡтисади зонаға оло ҡыҙыҡһыныуын иҫәпкә алып, республика Хөкүмәтенә уның территорияһын киңәйтеү мөмкинлеген ҡарауҙы йөкмәтәм". Шулай уҡ республика етәксеһе иксенсе иҡтисади зона булдырыу мәсьәләһе ҡаралыуын да белдерҙе.

● Иҡтисад менән бер рәттән, Башҡортостан цифрлы инфраструктураны үҫтереүгә лә иғтибар бүлә, быны интернет селтәренең киңәйеүенән дә күрергә мөмкин. Шулай уҡ декабрҙә донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәге ойошторолоуы ла киләсәктә республиканың "белем иҡтисадын" һәм "стартаптар фабрикаһы"ның үҫеш үҙәге буласағына бер дәлил. Быйылдан иһә "Сколтех" университеты менән берлектә магистранттар һәм аспиранттар өсөн программа тормошҡа ашырыласаҡ. Йәйгеһен Зәки Вәлиди урамындағы комплекста "Сколково" төбәк операторы статусындағы юғары технологиялар технопаркының беренсе сираты эшләй башлаясаҡ.

● Уҙған йылда республика Рәсәйҙең игенгә бай төбәге статусын нығытыуға өлгәште. Быйыл аграрийҙар 10 миллиард һумлыҡ ауыл хужалығы техникаһы алған, был йәһәттән Рәсәйҙә өсөнсө урында торабыҙ. Башҡортостандың агропродукцияһы күләме 177 миллиард һум тәшкил итһә, экспорт күләме 1,5 тапҡырға артып, 165 миллион долларға етә. Был инде ауыл хужалығы иҡтисадын ысынлап та тергеҙергә һәләтле инициативалы фермерҙарҙың булыуы ҡыуаныслы һәм артабан ауыл хужалығы продукцияһын экспортлауҙа уларҙың да өлөшөн арттырырға ниәтләнелә. Шул уҡ ваҡытта сеймалды урында эшкәртеү тармағын да үҫтерергә кәрәк. Башҡортостанда тормошҡа ашырылған ауыл ипотекаһы программаһы кредиттар буйынса ла, бирелгән күләм буйынса ла илдә иң уңышлыһы булып тора. Уға ярашлы күп ғаиләләр торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан, хәҙер иһә башҡа төбәктәр Башҡортостан тәжрибәһен өйрәнә. Үҙенең сығышында республика Башлығы Башҡортостандың Урал арьяғын үҫтереү программаһының иксенсе этабы тамамланыуын, ошо ваҡыт эсендә тиҫтәләгән инвестпроект тормошҡа ашырылыуын, әлеге ваҡытта был зона буйынса яңы стратегия әҙерләнеүен белдерҙе.

● Шулай уҡ Радий Хәбиров үҙ сығышында транспорт, юлдар, төҙөкләндереү һ.б. мөһим мәсьәләләргә лә туҡталып, уҙған йылда ошо өлкәләрҙә эшләнелгән эштәр, ҡаҙаныштар менән бүлеште.



**Ә быйыл иһә республика түбәндәге мөһим ваҡиғаларға әҙерләнә:**

● майҙа Өфөлә Валериан Альбанов исемендәге Поляриниктар музейы асыласаҡ; шулай уҡ билдәле шәхестәр, шул иҫәптән Сергей Аксаковтың тыуыуына - 230, Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына - 190, Нәжиб Асанбаевтың тыуыуына - 100, Сергей Довлатовтың тыуыуына 80 йыл тулыу билдәләнәсәк;

● "Торатау" геопаркын булдырыуға ғариза бирелгән, уның эсенә шихандарҙың тотош комплексы индерелгән;

● быйылдан яңы туристик территориялар булдырыла башлай; "Бөрйән" туристик кластеры барлыҡҡа киләсәк, быуың өсөн федераль бюджеттан 400 миллион һум самаһы аҡса бүленгән. Тағы ла ике - "Бөйөк Ирәмәл" һәм "Башҡортостан йөрәге" кластеры формалаштырыла;

● быйыл республикала "Йәш профессионалдар" чемпионатының финалы үтәсәк;

● "Ауыл уҡытыусыһы" программаһы дауам ителә, ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусылар 1 миллион һум компенсация аласаҡ, шулай уҡ улар өсөн грант та ҡаралған;

● юниорҙар араһында Спорт көрәше буйынса чемпионат үтәсәк;

● беренсе тапҡыр Рәсәйҙә уҙғарылған Халыҡ-ара традицион мәҙәниәттәр фестивале - VI Бөтә донъя фольклориадаһын Өфө ҡабул итәсәк.

**Ошондай ҡаҙаныштар һәм бурыстар менән бер рәттән, һүҙ ыңғайы тигәндәй, Радий Фәрит улы яҡын киләсәккә - 2024 йылға тиклем билдәләнгән пландар менән дә бер аҙ таныштырып китте. Йәғни:**

● 2024 йылға баш ҡалала заманса студенттар кампусы төҙөлергә тейеш, унда сит ил студенттары һаны 10 меңдән артасаҡ;

● БР Ауыл хужалығы министрлығы алдына 2024 йылға иген уңышын 5 миллион тоннаға еткереү бурысы ҡуйылды;

● 2024 йылға Башҡортостан ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү буйынса Волга буйы федераль округында иксенсе урынға сығырға һәм аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген нығытырға тейеш;

● 2024 йылға алданған өлөшсөләр проблемаһы хәл ителергә тейеш. Быны өсөн федераль бюджетҡа 6 миллиард һум һалынған;

● 2024 йылға тиклем торлаҡ төҙөлөшө инфраструктураһын үҫтереү өсөн федераль бюджеттан 8,5 миллиард һум алыу ҡаралған;

● 2024 йылда Өфө ҡалаһының (ҡалғаһенен) төҙөлөүенә 450 йыл тулыу федераль кимәлдә билдәләнәсәк;

● 2024 йылға яңы ҡорамалдар менән йыһазландырылған цифрлы һәм гуманитар профилле белем биреү үҙәктәре һаны 813-кә етергә тейеш, әлегә улар - 175. Бында балалар цифрлы технологияларҙы үҙләштерә, командала эшләргә өйрәнә, конкурстарҙа һәм олимпиадаларҙа ҡатнашырға әҙерлек үтәсәк;

● 2024 йылға 25 метрлыҡ 16 бассейн төҙөлөргә, һәр район үҙәгендә һәм ҡалала балалар йөҙергә өйрәнергә тейеш.

"Беҙ 2021 йылға өмөт һәм ышаныс менән аяҡ баҫтыҡ. Беҙҙең өсөн ул уңышлы булыр тип ышанам. Беҙгә һаулыҡ, тотороҡлолоҡ, мөһим ҡаҙаныштар килтерер, сөнки һәр көрсөк артынан күтәрелеш һәм яңырыу килә. Тормош ҡануны шундай. Республика башлығы булараҡ, мин унда йәшәүселәр өсөн яуап бирәм. Һәр береһе - ҙур тәжрибәгә эйәололар, сабыйҙар өсөн дә. Тормошҡа төрлө ҡарашлы, төрлө иманыслы, төрлө позициялы булғандар, шул иҫәптән беҙҙе ғәҙел тәнҡитләүселәр өсөн дә. Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, дөйөм юлыбыҙҙы лайыҡлы үтербеҙ, бер-беребеҙгә ҡарата аҡыллы һәм иғтибарлы, маҡсатҡа өлгәшеү юлында ихтыярлы һәм ныҡышмал булырбыҙ, берҙәмлегебеҙҙе нығытырбыҙ, тип ышанам.

Халҡыбыҙ әйтмешләй, тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан. Беҙ - тырыштар. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтар килеп тыумаһын, беҙ барыһын да булдырырбыҙ. Хыялдарҙы тормошҡа ашырырбыҙ. Алға, Башкирия! Вперёд, Башҡортостан!" - тип тамамланы сығышын Радий Фәрит улы.

Әйткәндәй, яуланған ҡаҙаныштар хаҡында киң мәғлүмәт саралары даими хәбәр итеп торҙо, шуға бөгөн уларға артыҡ ентекләп туҡталып тороуҙы кәрәк тип тапманыҡ. Ә бына быйыл һәм 2024 йылға тиклем башҡарыласаҡ эштәрҙе күрһәтеп үтеүҙе урынлы тип һананыҡ, сөнки үткәндәр менән түгел, алға ҡарап йәшәргә кәрәк. Мөрәжәғәтнамәлә яңғыраған бурыстарҙың нисек үтәлерен иһә ваҡыт күрһәтер.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләнә.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда февраль аҙағына тиклем дауаханаларҙа коронавирус инфекцияһы йоҡторғандар өсөн койкалар һанын кәметеү планлаштырыла. Дөйөм алғанда, 15 февралгә хәтлем уларҙың һанын 1000-гә ҡыҫҡартыу көтөлә. "Өфөнөң 5-се һәм 10-сы дауаханалары ғәҙәттәгесә эшләй башланы, медицина учреждениеларын профилле эшкә сығарыу планы әҙерләнгән. Койкалар эпидемиологик хәлгә ҡарап кәметелергә тейеш", - тине һаулыҡ һаҡлау министры.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Октябрь революцияһы урамында Башҡорт дәүләт медицина университетының яңы ятағын асыу тантанаһында ҡатнашты. Республика етәксеһе төҙөкләндерелгән бинаны ҡарап сыҡты, буласаҡ табиптар өсөн булдырылған көнкүреш шарттары менән танышты һәм студенттар менән аралашты, университеттың яңы ятағындағы ремонт сифатын юғары баһаланы. Ул шулай уҡ 5 мең урынлыҡ вуз-ара кампусты проектлай башлаған архитекторҙар ошондай кимәлгә йүнәлеш алыр тигән ышаныс белдерҙе. Уны Өфөнөң Дим районында төҙөү планлаштырыла.

✓Роспотребнадзорҙың республика идаралығы белгестәре һуңғы аҙнала балалар араһында киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләү осраҡтары күбәйеүен теркәгән. Республика ведомствоһы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина хәбәр итеүенсә, күрһәткес ете процентҡа артҡан. "Шулай уҡ беҙ дауахананан тыш пневмония менән ауырыуҙар һанын күҙәтеп барабыҙ. Өфөлә был күрһәткес 4,5 процентҡа кәмегән", - тине Галина Яковлевна.

✓Өфөнән Семен Елистратов Польшаның Гданьск ҡалаһында шорт-трек буйынса Европа чемпионатында 1,5 мең метр арала беренсе урынды алды. Семен Елистратов финишҡа 2 минут 18,384 секунд эсендә килеп етте. Көмөш миҙалды ла илебеҙ спортсыһы Денис Айрапетян алды (2.18,521). Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылдың декабрь аҙағында яҡташыбыҙ Семен Елистратов сираттағы тапҡыр Рәсәй чемпионы булды. Спортсы Коломнала уҙған Рәсәй ярыштарында шәхси зачетта иң яҡшы һөҙөмтә күрһәтте. Елистратов менән тағы 35 спортсы көс һынашты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ **"Беҙгә балаларҙың барлыҡ ихтыяжын иҫәпкә алырға, уларҙы компьютерҙан айырып, урамға алып сығырға, ысын йәйҙе тойоу мөмкинлеген биреү өсөн нимәләр уйларға кәрәк ине. Был бурыс үтәлде.**



*КӨНАУАЗ*

# ЙЫЛЫЛЫҠ ӨСӨН...

## ҡабаттан иҫәпләнә

**Һуңғы ваҡытта социаль селтәрҙәрҙә баш ҡалала йылылыҡ өсөн түләүҙәрҙең элекке йылдар менән сағыштырғанда күпкә артыуы, хатта пенсионерҙарҙың бер айлыҡ пенсияһы самаһы булыуы хаҡында борсоулы хәбәрҙәр йыш күренә башланы. Халыҡ ҡәнәғәтһеҙлек белдерә, әммә яуаплы, вазифалы кешеләр, ғәҙәттәгесә, "отписка" менән генә яуап бирергә тырыша йәки Республика Башлыһының килеп ҡыҫылғанын көтә, шунан ғына ҡыбырлай башлай.**

Был юлы ла, Радий Хәбиров иҫәпләүҙәрҙе ҡайтанан ҡарарға һәм түләүҙәрҙең былтыр декабрҙә ноябрь менән сағыштырғанда 42 процентҡа артығыраҡ булған осраҡта, артыҡ түләнгән сумманы кире ҡайтарырға ҡушыуы булды, барлыҡ механизм хәрәкәткә килде. Өфөлә йәшәүселәрҙең ҡайһы берҙәренә йылытыу өсөн сумма янынан иҫәпләнә, тип белдерҙе Өфө мэры Сергей Греков хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. "Беҙ "Өфө инженер селтәрҙәре" менән түләүҙәрҙе ойоштороу тураһында килешеүгә өлгәштек. Ғаризалар 26 ғинуарҙан ҡабул ителә. Халыҡ февраль квитанцияларында кире ҡайтарылған сумманы күрә ала", - тип билдәләне Сергей Греков. "Өфө инженер селтәрҙәре" предприятиеһында белдереүҙәренсә, ғариза өлгәһе һәм уны ҡабул итеү тураһында мәғлүмәт предприятиеның сайтына урынлаштырыла. БашРТС клиенттарына түләүҙәрҙе яңынан иҫәпләрҙәрме-юкмы - әлегә билдәһеҙ.

Шулай уҡ БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров етәкселегендә йылылыҡҡа һәм ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын сығарыу өсөн хаҡтарҙың артыуы мәсьәләһе буйынса видеобәйләнеш форматында кәңәшмә үтте. Унда ла Республика Башлыһы, шулай уҡ республика һәм федераль кимәлдәге ... ҡуҙәтеү органдарына ялыуҙар туктамауы билдәләнде. Радий Хәбиров Хөкүмәткә ҡыҫҡа ваҡытта хаҡтарҙың артыуы сәбәптәрен асыҡларға һәм хәл-торошто нормаллаштырыу буйынса кисекмәҫтән саралар күрергә ҡушты һәм Хөкүмәттә ҡыҙыҡһыныусы ойошмалар вәкилдәре ингән Эш төркөмө төҙөлдө. Тикшереүҙәр күп фатирлы йорттарға йылы биргәндә бик күп етешһеҙлектәрҙе, аныҡлап әйткәндә, иҫәп алыу нөктәләренең көйләнмәүе йәки төҙөк булмауы, күп фатирлы йорттарҙы йылылыҡ менән тәьмин итеү режимы боҙолоуы, иҫәп алыу приборҙарының күрһәткестәрен ваҡытында тапшырмау, йылылыҡ өсөн түләгәндә майҙандарҙың тап килмәүе, шулай уҡ йылылыҡ биреү миҙгеленә әҙерлек һәм ҡулланыу барышында урындағы үҙидаралыҡ менән идара итеү ойошмаларының үҙ-ара бәйләнеше булмауын асыҡланы.

Башҡортостан Республикаһының Экология министрлығы "ТКО-Башкортостан" автоматлаштырылған системаһы ярҙамында төбәк операторҙарының графикка ярашлы эшләүен күҙәтәсәк һәм һәр айҙың 15-ендә мәғлүмәттәрҙе рәсми сайтында һәм социаль селтәрҙәрҙә урынлаштырып барасаҡ, шулай уҡ, асыҡланған етешһеҙлектәрҙе күрһәтеп, муниципалитеттарға ебәрәсәк. Графикка ярашлы, ҡалала һәм район үҙәктәрендә сүп-сар көн һайын, ауылдарҙа һәм башҡа тораҡ пункттарҙа һауа температураһы +4 һәм унан түбән булғанда өс көнгә бер, +5 һәм унан юғары булғанда көн һайын сығарылырға тейеш. Әгәр был хеҙмәт ошо графикка ярашлы башҡарылмаһа, граждандар өсөн түләү, ҡала йәки ауыл булыуына ҡарамаҫтан, 55 һум тәшкил итәсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әҙерләне.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҠАРҘАН ТАҘАРТМАҺАЛАР...



**Әлегә баш ҡалала, йылылыҡ менән тәьмин итеү, сүп-сар түгеүгә хаҡтар артыу мәсьәләһе менән бер рәттән, Салауат Юлаев проспекты һәм Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге юл сиселешен ремонтлау темаһы ла көн үҙәгенән төшкәне юҡ. Мэрияла ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков етәкселегендә үткән видеоконференция форматындағы оператив кәңәшмәлә был мәсьәлә буйынса хакимиәт башлығы урынбаҫары Радмил Мөслимов сығыш яһаны.**

27 ғинуарға ҡарата күперҙең 20 балка араһы һүтелгән. Юлдарҙа "тығын" барлыҡҡа килтермәү һәм хәүефһеҙлек маҡсатында был эш бары тик төнөн, Салауат Юлаев проспектындағы хәрәкәтте тулыһынса ябып тормошҡа ашырылған. Әлеге ваҡытта өҫтәмә терәүҙәрҙең нигеҙенә свайҙар ҡағыла. Транспорт хәрәкәте даими контролдә тотола һәм онлайн режимда объекттағы 10 светофорҙың эше көйләнә, һеҙөмтәлә эш көндәрендә (18-25 ғинуарҙа) ҡалаға ингәндә иртәнге сәғәттәрҙә 9-10 баллыҡ "тығын"дар күҙәтелмәгән. Реконструкция ваҡытын ҡыҫҡартыу маҡсатында подрядсы һәм проект ойошмаһы берлектә монолит конструкциялар урынына өлөшләтә йыйылма-монолит конструкциялар ҡулланыу вариантын, шулай уҡ барлыҡ терәүҙәрҙә лә бер үк ваҡытта эш алып барыу графигын эшләгән.

Йыл һуңында - йыл башында ыҙғыш алмаһы булып күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәргә йылылыҡ өсөн түләү мәсьәләһе торҙо. Ниһайәт, ҡыҙыҡһыныусы ойошмалар йорттар буйлап йөрөп иҫәп приборҙарының һәм инженер ҡорамалдарының эҙәклөгөн тикшереп сығырға ваҡыт тапҡан. Был хаҡта Өфө ҡалаһының "Торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-һы директоры Альберт Ғәзелшин мәғлүмәт бирҙе. Уның тәҡдиме: барлыҡ дөйөм йорт иҫәп приборҙарын күрһәткестәрҙе дистанцион алыу системаһы менән тәьмин итергә. Әлегә был система менән 536 йорт ҡуллана һәм ул үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫлаған.

Яңылыҡтарҙан: быйыл ҡар күп яуыу сәбәпле, был йөнәттән ниндәй эштәр эшләнгәнен һәм етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә граждандар ҙа ҡатнашһын өсөн 27 ғинуарҙа баш ҡалала ҡар таҙартыу буйынса "Ҡарлы Өфө" интерактив картаһы эшләй башланы. Уға һылтанма ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында "Карталар" тигән бүлектә ҡуйылған. Ихаталар, урам-юл селтәре территориялары таҙартылмауына шаһит булған граждандар картала был турала хәбәр ҡалдыра ала. Быны өсөн ошо урынды фотоға төшөрөп, картала ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт яҙып ҡалдырыу ҙа етә. Шулай уҡ, әгәр ҙә мөрәжәғәтегеҙ буйынса нимә эшләнгәнен күҙәтеп барырға теләһәгеҙ, электрон почтағыҙҙы күрһәтергә онотмағыҙ. Уға һылтанма һалынасаҡ һәм уның буйынса теләгән ваҡытта мөрәжәғәтегеҙҙең статусын күрергә мөмкин. Был - власть менән халыҡ араһын тағы ла яҡынайтыу йүнәлешендә яһалған сираттағы аҙым, сөнки ошо көндәрҙә генә Республика Башлығы Радий Хәбиров халыҡҡа яҡынығаҡ булырға, уларҙың проблемаларын күрергә, уларҙы ишетергә кәрәклеген белдергәйне. Юҡһа, ара, ысынлап та, йырағая бара...

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ИҢ ЯҠШЫ ТӘЖРИБӘЛӘР

**Өфөнөң "Аврора" һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге базаһында Башҡортостандың муниципаль берәмектәре хакимиәттәре башлыҡтарының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫарҙары өсөн семинар-кәңәшмә үтте. Уның эшендә Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова ҡатнашып, социаль өлкәләге эш тәжрибәһе тураһында сығыш яһаны.**

Үҙенең сығышында Алина Наил ҡыҙы өс тәжрибә өлгәһен миҫал итеп килтерҙе. Беренсе - "Мин сәләмәт тормошто һайлайым" проекты етем балалар өсөн тәғәйенләнгән ойошмаларҙа тәрбиәләнеүсе социаль хәүеф аҫтында торған үҫмерҙәр менән эшләүгә йүнәлтелә. 2018 йылдан алып уларҙа наркотик матдәләр ҡулланыуҙы профилактикалау буйынса психологтар, педагогтар һәм табиптар ҡатнашлығында саралар үткәрелә. Һөҙөмтә күренмәһә, балалар дәүләт клиникаларында стационар дауаланыуы үтә, әммә был ҡыҫҡа ваҡытлы ғына һөҙөмтә бирә - улар ҡабат балалар йортона ҡайта, үҫеп, балалар йортонан сығып китә, үҙҙәренә таныш булған мөхиткә ҡабат эләгә һәм тағы ла һаҙлыҡҡа бата. "Беҙ балаларға ярҙам итеү өсөн һөҙөмтәле юлдар эҙләнек, - ти Алина Сөләймәнова. - Һәм "12 аҙым" тип аталған ысулға туҡталдыҡ: алкоголь, наркотик бәйлелеге булыусыларҙы реабилитациялау менән шөғөлләнгән "Благо" дәүләткә ҡарамаған үҙәккә мөрәжәғәт иттек. Һөҙөмтәләр бар".

Икенсе проект - "Өфө уйнай - 2020" интерактив офлайн-уйыны. Уны тормошҡа ашырыу сәбәптәренең беренһе - яны коронавирус инфекцияһы таралыуға бәйле ҡатмарлы эпидемиологик хәл-торош, үҫмерҙәр-йәштәр араһында төрлө челлендж, квест һәм башҡа онлайн-әүҙемлектең популяр булыуы. "Беҙгә балаларҙың барлыҡ ихтыяжын иҫәпкә алырға, уларҙы компьютерҙан айырып, урамға алып сығырға, ысын йәйҙе тойоу мөмкинлеген биреү өсөн нимәләр уйларға кәрәк ине. Был бурыс үтәлде. Интерактив офлайн уйында бөтә ҡала ҡатнашты, ул уҡыусылар, уларҙың ата-әсәләре тарафынан ыңғай ҡабул ителде. Уйынды быйыл йәйгенен дә дауам итергә уйлайбыҙ", - тине сығыш яһаусы.

Шулай уҡ Алина Сөләймәнова "Хәүефһеҙ юл" дөйөм ҡала акцияһы" тураһында ла мәғлүмәт бирҙе. Былтыр февралдә башланған акция Яҙ, Йәй, Көҙ, Ҡыш осорҙарына бүленә. Алып барылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә былтыр 12 айҙа балиғ булмаған балалар ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғалары 2019 йыл менән сағыштырғанда - 11, балалар ғәйебе менән барлыҡҡа килгән ДТП-лар һаны 20 процентҡа кәмей. Өфө ҡалаһының был тәжрибәһе федераль кимәлдә танылған һәм "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге" проектына индерелә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Гемоглобин

❖ Ҡанда гемоглобин кимәлен бер аҙна эсендә күтәрергә була. Быны өсөн 2/3 стакан кишер һуты, 1/3 стакан сөгөлдөр һәм лимон һуттарын бергә ҡушып, көн һайын ашаяр алда ярты стакан эсергә. Йәки гранат, лимон, кишер, сөгөлдөр, алманың 100-әр грамм һутын һәм балды бергә ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә мөмкин.

## Аяҡ тирләһә

❖ Аяҡтарҙы йылы һыуҙа йыуғандан һуң, имән ҡайыры ҡайнатылған һыуға тығып,10-15 минут тоторға.

## Арҡа һөйәген ныҡытыу

❖ Быны өсөн әрем үләнен сей ҡатыҡҡа ҡушырға һәм арҡа һөйәгенә аппликация яһарға. Был дауанан тубыктар, яурындар, быуындар һыҙлауы ла бөтә.

## Ашҡаҙанды таҙартыу

❖ 100 грамм әстерхан сәтләүегенең үҫемлек майында ҡыҙҙырып, теләгән тиклем бал ҡушырға. Сәтләүектең 2-3 бөртөгөн ашарға.

❖ Мәтрүшкә һыуы ашҡаҙанды лайланан таҙарта. 1 балғалаҡ киптереп ваҡланған үләнде 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешерергә һәм аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр ас ҡарынға эсергә.

## Юғары ҡан баҫымы

❖ Сепрәкте 5-6 процентлы шарап һеркәһенә манып, 5-10 минутҡа табандарға ябырға. Ҡан баҫымының кимәлен тикшереп тороу мөһим, ул яҡшырғас та процедураны туктатырға кәрәк.

## Боғаҡ шешеү

❖ 200-шәр грамм бал, әрселгән әстерхан сәтләүеге һәм бешерелмәгән ҡарабойҙай ярмаһын алырға (һуңғы икеүһен ҡәһүә тартҡыста ваҡларға). Барыһын да яҡшылап бутап, килеп сыҡҡан бутҡаны төүлек эсендә ашап бөтөргә. 3 көндән тағы ла ошо ҡатышманы әҙерләргә, әммә инде уны 9 көн буйы ашарға. Шунан 3 көн ял итергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ "Башҡортса һөйләшәһең, беҙҙеңсә һүгенәһең", - тине тегенеһе оҡшатмай. Апай ҙа берешә торғандарҙан түгел: "Беҙҙең телебеҙ юғары мәҙәниәтле, унда һүгенеү һүҙе юҡ!" - тине.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Себер халыҡтарында туҡыусылыҡ һәм бәйләнгән әйберҙәргә бер хеҙмәтен арнаған абруйлы этнограф А.А. Попов этногенетика мәсьәләләрен хәл иткәндә тарихи-сағыштырма методын ҡулланып "матди мәҙәниәт әйберҙәрен тасуирлауҙан тыш, уларҙы эшләү ысулдарын да һүрәтләү мөһим" булыуына тикшеренеүселәрҙең иғтибарын йәлеп итә.

Башҡорттарҙың туҡыма туҡыуға бәйле йорт кәсептәре быуаттар дауамында хайуандар һәм үҫемлек сеймалдары нигеҙендә үҫешкән. Һарыҡ, дөйә йөндәренән, кәзә мамығынан һәм шулай уҡ кесерткән, киндер, һуңыраҡ етендән еп иләү буйынса алдынғы оҫталыҡтар булған.

Бынан бер ярым, ике быуат элек Башҡортостандың көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондарында малсылыҡ менән көн күргән халыҡтың туҡыусылыҡ гәҙәттәре нигеҙендә тәбиғи рәүештә йөн торған. Туҡымалар сеймалдың булыу-булмауы һәм сифатына, шулай уҡ тәғәйенләнешенә ҡарап айырылған. Сәкмән, тыштан кейелгән ыштан, ҡушаҡ, шарф, сәлля, намаҙлыҡ, юрған, сәрмә (кәшен), балаҫ, ябыуҙар йөндән иләнгән ептәрҙән туҡылған; тирмә таҫмалары һәм башҡа әйберҙәр ҙә әҙерләгәндәр. Йөн эшкәртеү һәм еп сиратыу оҫталыҡтары быуаттар дауамында камиллаштырыла барған. Был эштәр хужалыҡта һарыҡ тотҡан Евразия халҡы өсөн хас булған.

Һарыҡ йөнө көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттарында төп сеймал булып торған. Малсылыҡ-игенселек менән йәшәгән төбәктә һарыҡ үрсетеү буйынса кейеҙ баҫыуға арналған бүлектә тулы мәғлүмәт бирелде. Бында һарыҡтар һаны кәмеүгә бәйле тула һәм кейеҙ баҫыу туҡтатылған, әммә балаҫ, сәкмән, ойоҡ, шәлдәр өсөн еп иләү дауам иткән. Элегерәк замандарҙа Ырымбур һәм Урал аръяғы далаларындағы бай башҡорттар дөйә аҫраған осорҙа был хайуандарҙың йөнө лә тулы кимәлдә ҡулланылған. Кәзә дебетен тарап алғандар, ә мамығы ҡабарынҡы булмаған кәзәләрҙе һарыҡ йөнө кеүек ҡырҡҡандар.



*Һарыҡ-кәзә ҡырҡыу өсөн ҡайсы һәм дебет тараҡ.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ФЕКЕРҘЕ ДАУАМ ИТЕП...*

# ОЯТ ҺҮҘҘӘРҘЕ...

## лөғәттән алып ташлайыҡмы?




**Мин, гәҙәттә, гәзит биттәрендә донъя күргән мәҡәлә йөкмәткеһенә үҙ ҡарашымды белдереп бармайым, сөнки һәр кемдең үҙ фекере. Уҡыусы булараҡ, уларҙы ихтирам итәм, оҡшамаһа, уҡымайым. "Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 2-се һанында Хәлил Һөйөндөковтың "Үҙ исеме менән атау оятмы ..." исемле мәҡәләһен уҡығас, яҙмай булдыра алманым. Мин дә, автор кеүек, филолог түгел, ә был темаға үҙ фекереңде белдереү өсөн бындай белем эйәһе булыу кәрәкмәй ҙә.**

Автор "Оят, ҡулланырға ярамай икән, бындай һүҙҙәрҙе, һүҙ бәйләнештәрен, әйтемдәрҙе "исҡелек ҡалдыҡтары" тип, халҡыбыҙҙың лөғәтенән бөтөнләйгә алып ташларға, онотторорға, йә булмаһа, уларҙы урыҫтарҙан отоп алған "культурный" һүҙҙәргә алыштырыу кәрәктер?" тигән һорау ҡуя. Ә нәфис әҙәбиәттә ҡулланырға ярамаған һүҙҙәр телмәрҙән бер ҡасан да юғалмай бит ул. Бына беҙ үҙебеҙ бер гәзиттән дә, журналдан, китаптан уҡымаһаҡ та, ундай һүҙҙәр барлығын белеп үҫтек бит. Артабан да шулай буласаҡ. Ә ике миллионға яҡын башҡорттоң ауыҙын нисек ябып ҡуйырға була? Улай булғас, дипломлы медиктар нинә халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итеүҙе туҡтатмай? Унда ла рәсми медицина ҡабул итмәгән алымдар ҡулланыла бит!

Башҡорт теле лә әҙәби телдән һәм диалекттарҙан тора. Улар бер-береһенән ныҡ айырыла ла. Әҙәби тел, һис шикһеҙ, диалекттар иҫәбенә байый ғына. Ә шулай ҙа... Дәүләт яҡлауында булған башҡорт дәүләт телен, бәяғы автор миҫал итеп килтергән, урындағы халыҡ һөйләшендә ҡулланылған "культураһыҙ" һүҙҙәр менән боҙорға ярамайҙыр, минеңсә. Һуңғы осорҙа былай ҙа матбуғат биттәрендә, шулай уҡ эстрадала, ҡолаҡҡа ятмаған һүҙҙәр күбәйҙе. Сәхнәләрҙә, радио- телевидениела сығыш яһаусыларҙы тыңлаһаң, сәстәрең үрә тора!

...Ә үҙ-ара аралашыуҙарҙа ул "һүҙҙәрҙе" ҡулланырға тура килгән мәлдәрҙе инҡар итмәйем. Мәләүез химия заводында инженер-конструктор булып эшләп йөрөйөм. Бер көндө беҙгә Ленинград үҙәк ҡаҙанлыҡ-турбина институты (ЦКТИ) хеҙмәткәре командировкаға килде. Начальнигыбыҙға инеп, үҙенә төҙөлөш эштәрен дә, машиналар төҙөлөшөн дә белгән белгесте беркетеүҙәрен һораған. Етәксебеҙ мине тәҡдим иткәс, шатланған, сөнки бейек-бейек ҡоролмалар аша йөрөүҙе ир кеше бурысы тип һанаған уҙаман булып сыҡты. Дуҫлашып киттек. Минең уның тыуған ҡалаһында ике йыл әрме хеҙмәтендә булыуымды белгәс, уртаҡ һүҙҙәребеҙ тағы ла артты. Үҙе лә республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихы, бигерәк тә башҡорт теле менән ҡыҙыҡһынды. Тел менән бәйле осраҡтарҙы йыш һорашты. Ул минең армияла саҡта үҙ телемде пропагандалау тураһында һөйләгәндәремде ҡыҙыҡһынып тыңланы. Беҙҙә Күгәрсен районында тыуып үҫкән, милләте буйынса сыуаш майор Сергей Краснов хеҙмәт итә ине. Башҡорт телен, кем әйтмешләй, һыу кеүек эсә. Кеше алдында әрләргә тура килһә, уға башҡортса бер-ике һүҙ әйтһән, ҡапыл туҡтап, тынысланып ҡала торғайны. Был хаҡта Ленинград ҡунағына ла һөйләнем. "Улай булғас, минең һинә бер үтенесем бар", тине ул. Ул эшләгән лабораторияла 80-90 белгес хеҙмәт итә, шулар араһында татар милләтенән әсе телле Вил исемле инженер ҙа бар икән. Әлеге хеҙмәттәше гел генә Юрий Петровичҡа тәртттәрөп һөйләргә яратҡан. Был танышымдың зитына тейгән. Вилдең нисек ауыҙын ябырға, тип, минән ярҙам һораны. Башҡортса ике һүҙ өйрәттем. Юрий Петрович ҡайтышлай, онотоп ҡуймайым, тип, уларҙы яҙып алды хатта.

Ҡайтып, икенсе көн эшкә сыҡһа, начальнигының тыуған көнө айҡанлы табын ҡорғандар икән. Юрий Петрович Вилдең тәртттәрөп ниҙер әйтәсәген һиҙеп, усына теге ике һүҙҙе яҙып ала. Бына уға ла тост әйтеү сираты килеп етә. Тороп баҫыуы була, Вил шым ғына ниҙер әйтеп ҡуя. Танышым усына ҡарай ҙа: "Вил, кишер сәйнәмә", - ти. Уныһы ҡып-ҡыҙыл була, кисә тамамланғансы өндәшмәй ултыра, тәүгеләрҙән булып ҡайтыу яғын самалай. Хеҙмәттәштәре Юрий Петровичтан Вилгә ни әйтеүен һорай, әллә һүгенеп яуап бирҙеңме, тип ҡыҙыҡһыналар. Юрий Петрович һүҙҙәрҙең мәғәнәһен белмәгәс, ни тип әйтергә лә белмәй. "Юҡ, был һүҙҙәрҙе өйрәткән кеше юғары мәҙәниәтле, ул һүгенеү һүҙҙәрен өйрәтмәҫ", тиеү менән генә сикләнә. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ оят булған, шулай уҡ һүгенеү һүҙҙәрен бик һирәк ҡуллана йәки бөтөнләй икенсе һүҙ аша кинәйә менән әйтә белә.

Мәләүезгә тағы бер килгәнендә Юрий Петрович заводтағы кешеләрҙән Вилгә ни тип яуап биргәнен тәржемә итеүҙәрен һорай. Кишерҙең - морковь, сәйнәмә - ни жуй икәнен ишеткәс, ни эшләп ул ике һүҙҙән хеҙмәттәшенең мәңге йырыҡ ауыҙы ябылыуына аптырай. Урыҫ кешеһе бит ата-ние менән бик ҡаты һүгенергә ярата, ә беҙ бына шундайыраҡ "кишер сәйнәмә" тигән һүҙҙәр менән дә кешенең ауыҙын яба алабыҙ.

Минең атай - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 2 класс белемле, пенсияға сыҡҡансы механизатор булып эшләне. Ике улы, дүрт ҡыҙы алдында бер ҡасан да һүгенмәне. Бысраҡ һүҙҙәр ҙә ҡулланманы тип әйтер инем, булды уның менән дә бер осраҡ. Һарайға мал янына инде лә һалам ашамаған һыйырға ҡарап, б... аша, тине. Шул саҡ мине абайлап ҡалды ла, бик уңайһыҙланды. Башланғыс белеме булмаһа ла, ул юғары мәҙәниәтле, үгәй әсәй ҡулында үҫһә лә, дөрөҫ тәрбиә алғайны.

Автор мәҡәләлә килтергән әлеге һүҙҙәр, әлбиттә, беҙҙең лөғәттә булыр инде ул. Тик уларҙы халыҡ алдында асыҡтан-асыҡ ҡулланырға ярамағанлығын атай-әсәй өйрәтергә тейеш. Был - уларҙың изге бурысы. Коммунистик тәғлимәткә нигеҙ һалыусы Карл Маркс ошо хаҡта: "Беҙҙә бала саҡтан уҡ бот араһындағы ағзаны күрһәтеп йөрөүҙе оят тип тәрбиәләнеләр, шуға күрә беҙ ыштан кейеп йөрөйбөҙ. Әгәр атай-әсәйебеҙ бала ваҡытыбыҙҙа сәтәкәй бармаҡты күрһәтеп йөрөү оят тиһә, беҙ ғүмер буйы уны кеше күҙенә күрһәтмәҫ өсөн урап йөрөтөр инек", - тип яҙа үҙенең бер хеҙмәтендә.

Карл Марксты уҡымай үҫкәндәр ҙә бар арабыҙҙа. Химия заводында эшләп йөрөгән осорҙа ҡалаға йомош менән килеп ҡайттым. Шул автобустағы бер ваҡиға хәтеремдә уйылып ҡалған. Алдағы рәттәрҙәге урында бер башҡорт апайы күршеһе менән гәп һата. Туҡталышта тулы кәүҙәле мәрйә килеп инде лә, теге апайҙан урын һораны. "Һин дә иҙән йыуаһың, мин дә иҙән йыуам, ни эшләп һинә урын бирергә тейешмен?" - тине башҡорт апайы. Тегенеһе айвайына ҡуймағас, "оло ағай" телендә бер-ике һүгенеү һүҙен дә ҡушып ебәрҙе. "Башҡортса һөйләшәһең, беҙҙеңсә һүгенәһең", - тине тегенеһе оҡшатмай. Апай ҙа берешә торғандарҙан түгел: "Беҙҙең телебеҙ юғары мәҙәниәтле, унда һүгенеү һүҙе юҡ!" - тине. Был ғауға нимә менән бөтөр ине икән, әгәр ҙә пассажирҙар ҡыҫҡырып көлөп ебәрмәһә. Шулай заводҡа барып еткәнсе көлөштөк.

Нәҡ ошо апай һымаҡ, үҙ телен яратҡан, уны камил белгән ябай халыҡ һаҡлай ҙа инде телебеҙҙең сафлығын, гүзәллеген, матурлығын. Ә беҙгә, махсус уҡыу йорттарында белем алырға мөмкинлек булғандарға, уларҙан өлгө алырға, телебеҙҙең бәсен һаҡларға кәрәк.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

✓ Әүәлерәк тарҡалыуға дусар ителгән Кимаҡ ҡағанаты төпкөлдәренән сыҡҡан ҡыпсаҡ ҡәбиләләре XI быуат урталарында Иртыштан Дунайға тиклемге икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы биләп ала.



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# АТЫБЫҘ - УРАН, ЗАТЫБЫҘ БАШҠОРТ БЕҘҘЕҢ



Ҡытай сығанаҡтарында иҫкә алынған ҡай һәм уғыҙҙарҙың кайи (кайиг) ҡәбиләләренең нәҫелдәш булыу-булмауы хаҡында берҙәм фекер юҡ. Академик В.В. Бартольд уларҙың берберәһенә тап килеүен инҡар итә: "Кайи - гуз, йәғни уғыҙҙарҙың 24 ҡәбиләһенең береһенең атамаһы, уларҙан осман хакимдары династияһы сыҡҡан...". Ә икенсе бер тарихсы Маркварт уларҙы төркиләшкән монголдар тип иҫәпләй, уның фекеренсә, тап ошо хәл ҡан ҡойоусы һәм үҙ туғандарын һәләк итеүсе Османдар нәҫеленең тарихи ролен аңлата ла инде. "Асылында, османдарҙың ҡай ҡәбиләһенән сығыуы шик тыуҙырмай", - тип яҙа ул. Ошо һығымтаны раҫлаусы дәлил сифатында ул Осман солтаны Баязид II заманында (1481-1512) йәшәгән Нәшри исемле автор әҫәренән алынған мәғлүмәтте килтерә: "Сөләймән шах, Кайа-Алп улы, уғыҙҙар араһында иң аҫыл сығышлыларҙан булған каи ҡәбиләһенән ине...".

Тарихи сығанаҡтарҙа иҫкә алынған урянхайҙар, ҡай ҡәбиләһенең күпселеге көнбайыш тарафтарына юлланғандан һуң да Байкал аръяғында, Баргуджин-Токум тип аталған өлкәлә йәшәүен дауам итә. XIII быуатта улар араһынан Сыңғыҙ хан ғәскәрендә дан ҡаҙанған Сүбидәй баһадир һәм Джелме исемле полководецтар сыға. Уранхяй ҡәүеме вариҫтары артабан хәҙерге тыва һәм яҡут халыҡтары этногенезында мөһим урын биләй.

VII-X быуаттар арауығын эсенә алған "Танхойяо" ("Тан династияһы күҙәтеүе") хроникаһында ҡай ҡәбиләһе тамғаһының йылан билдәһе рәүешендә булыуы теркәлгән. Шулай уҡ уғыҙҙарҙың составында кайи, төркмәндәрҙә кайы ырыуҙары булыуы билдәле. Ошоға бәйләп, тарихсы Ю.А. Зуев былай тип яҙа: "IX быуаттан башлап, кайылар төркмән-уғыҙҙарҙың бер ҡәбиләһе рәүешендә билдәле була. Төркмәндәрҙең кайыһы һәм ҡытай сығанаҡтарындағы си (һаи) халҡының бер үк ҡәүем булыуына шик юҡ, сөнки улар XIX быуатҡа тиклем 11 быуат элегерәк "Танхойяо"ла килтерелгән бер үк тамғаларын һаҡлап ҡала алған".

Әүәлерәк тарҡалыуға дусар ителгән Кимаҡ ҡағанаты төпкөлдәренән сыҡҡан ҡыпсаҡ ҡәбиләләре XI быуат урталарында Иртыштан Дунайға тиклемге икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы биләп ала. Күсмә төркиҙәрҙең Дәште Ҡыпсаҡ берләшмәһе бығатиклем көнсығыш тарафтарында көн иткән ҡай һәм кун халыҡтарының көнбайышҡа табан кинәт башланған экспансияһы һәм ошоноң менән бәйле ҡеүәтле миграция тулҡыны һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Евразия территорияһында һәр береһенең үҙ ханы булған бихисап күсмә тормош алып барыусы урҙалар хасил була.

Ошондай ханлыҡтарҙың береһе хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһына ҡараған ерҙәрҙә көн итә. Был ханлыҡта уран ҡәбиләһе өҫтөнлөк алып, уның хандары Хорезмшах дәүләте һәм Караханидтар ҡағанаты менән бәйләнеш тота. Үҙ мәнфәғәттәрен яҡлау маҡсатында Ҡыпсаҡ-Уран ханлығы йәнәштәге башҡа ханлыҡтар менән сәйәси союздарға инә, улар менән булған бәйләнештәрҙә көсөргәнешлек тыуҙырмай, тыныс көн итеү сәйәсәтен үҙ итә. Әммә ҡеүәте артҡандан-арта барған Хорезм хандары башҡа бәләкәйерәк ханлыҡтарҙы буйһондороу сәйәсәтен өҫтөн күрә. Сығышы менән уғыҙҙарҙың бекдели ҡәбиләһенән булған Хорезмшах Ҡутб ад-дин Айбек (1097-1127) 30 йыл дауамында ҡыпсаҡтарға һәм башҡа "тоғролоҡһоҙ" төркиҙәргә ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре алып бара. XIII быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы Минһаж ад-дин Усман әл-Джузджани уның тураһында бына ниҙәр яҙа: "Ул Хорезмдың бөтөн территорияһын үҙ юрисдикцияһына алды һәм сик буйындағы ерҙәрҙе үҙенә буйһондорҙо; үҙенең һаҡ булыуы һәм алдан күреүсәнлеге арҡаһында дошмандарын һәм тирандарҙы яуызлыҡтар ҡылыуҙан һәм фетнәләрҙән тыйып торҙо. Ул шулай уҡ Хорезмшахтар дәүләте сиктәрен мәжүсиҙәрҙән - саксиндар, булғарҙар һәм ҡыпсаҡтарҙан һаҡланы".

Ҡутб ад-дин Айбектың вафатынан һуң хан тәхетенә уның улы `Ала ад-дин Атсыз (1128-1156) ултыра. Шул уҡ тарихсы Джузджани уның тураһында ла мәғлүмәт ҡалдырған: "... бер нисә тапҡыр Хорезмдан яу менән сыҡты - ҡайһы саҡта зарурлыҡ булғанлыҡтан, ә башҡа осраҡтарҙа үҙ теләге менән - һәм үҙ ғәскәре менән Джендҡа, Төркөстанға һәм ҡыпсаҡтарға ҡаршы барҙы; үҙенең аҡыллылығы, һәләттәре һәм башлы булыуы арҡаһында ул үҙ эштәрендә сикһеҙ уңыштар ҡаҙанды". Әммә`Ала ад-дин Атсыз Ҡыпсаҡ-Уран ханлығы баш ҡалаһы Сығнаҡты яулап ала алмай.

XII быуатта Урта Азияла сәйәси ситуация ҡатмарлаша бара. 1125 йылда Ляо империяһы - Кидань (Ҡытай) державаһы Маньчжуриянан сыҡҡан чжурчжендар тарафынан тар-мар ителә. Көнбайышҡа табан күсеп китергә мәжбүр ителгән кидань халҡы Көнсығыш Төркөстанда яңы держава ҡора, уны төркиҙәр Ҡара Ҡытай, тип атай.

Байтаҡ ҡына төрки ҡәбиләләре Ҡара Ҡытай гүрханы власын танырға мәжбүр була. Сельджукиттар солтаны Санджар үҙенә хыянат иткән халыҡтарҙан үс алырға теләп, бик ҙур ғәскәре менән Мавераннахр өлкәһенә килә. Бында, Сәмәрҡәндтән алыҫ булмаған бер урында, Урта быуаттарҙа иң ҙур тип иҫәпләнгән яу башлана. Ошо һуғышта һәр ике яҡтан 100 меңләп яугир ҡатнаша. Алышта Ҡара Ҡытай гүрханы ғәскәре еңеүгә өлгәшә. Ошо еңелеү уғыҙҙарҙың Сельджукиттар дәүләтен бик ныҡ ҡаҡшата, ул артабан был ерҙәрҙә үҙенең элекке власын ғәмәлгә ашыра алмай. Хорезмшах Атсыз Санджар солтанға буйһоноуҙан баш тарта.

Урта быуаттарҙа Хорезм дәүләте, башҡа сит ҡәүемдәр яғынан янаған хәүеф-хәтәрҙән һаҡланыу маҡсатында, ҡыпсаҡтар менән араларҙы яҡынайтырға тырыша. Бындай сәйәсәт бигерәк тә хорезмшах Ала ад-дин Текеш ибн Ил-Арыҫлан (1172-1200) хакимлыҡ иткән дәүергә хас. 1182 йылда Текеш улы Малик-шах хакимлыҡ иткән Дженд ҡалаһына (ул хәҙерге Ҡаҙағстандың Ҡыҙыл Урҙа ҡалаһынан 115 саҡрымда урынлашҡан Жанакала археологик ҡаласығы) үҙенең күп һанлы ҡораллы яугирҙары менән ҡыпсаҡ хакимы Алп-Ҡара Уран килә. Ул хорезмлыларға ҡыпсаҡтар менән сәйәси союзға инеп, быны үҙ-ара никах менән нығытырға тәҡдим итә. Шунан һуң хорезмшах Текеш һарайына хандың Икран исемле улы килеп етә. Элегерәк иҫкә алынған Джузджани ошо хаҡта бына ниҙәр яҙа: "Ул (Текеш. - **Авт. иҫк.**) Акран (йәиһә Икран) исемле ҡыпсаҡ ханы менән союзға инде һәм ошо хакимдың ҡыҙына өйләнде. Был ханума донъяла ҙур билдәлелек тапты һәм юғары урын биләне, бигерәк тә үҙенең улы, хорезмшах Мөхәммәт солтан хакимлыҡ иткән осорҙа. Ул һис бер бирешмәҫ холоҡло, үтә дәртле һәм бойороусан темпераментлы ҡатын булды. Үҙенең улы хакимлыҡ иткән заманда ул Худавенда-Джахан, йәғни, Йыһан Хужабикәһе титулын алды".

Ҡыпсаҡ-Уран шахинәһенең үҙ исеме Теркен-хатун була. Хорезм һәм ҡыпсаҡ союзы 1182 йылда ҡара ҡытайҙарға ҡаршы берҙәм поход менән билдәләнеп, Мавераннахр территорияһын Таразға тиклем "кафырҙарҙан" азат итергә мөмкинлек бирә. Ҡыпсаҡ-уран яугирҙары күмәкләп солтан Текешҡа хеҙмәт итергә яллана, ул быларға һәйбәт түләү һәм һарай эргәһендә чиндар бирергә вәғәҙә итә. Уларҙан ялланма яугир отрядтары төҙөлә. Шулай итеп, бығаса үҙаллы булған Ҡыпсаҡ-Уран ханлығы Хорезм вассалына әүерелә, ә уның элекке ғәйәр хандары ни бары Дженд һәм Сығнаҡ хакимдарының наместниктары дәрәжәһендә генә тороп ҡала.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

**Фронттан Башҡортостанға ебәрелгән документтар ҙа байтаҡ. Бына уларҙың бер нисәһе (эпоханың сәйәси һәм тел үҙенсәлектәре тулыһынса һаҡланды):**

**Еңеү алып ҡайтырбыҙ**

*ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетена, Верховный Совет Президиумына, Башсовнаркомға һәм бөтә Башҡортостан халҡтарына.*

Беҙ, башҡорт атлы дивизияһының старший лейтенанты иптәш Б. Мамбеткулов командирлек иткән подразделениенең боецтары, Башҡортостан халҡтарының бүләктәрен, хаттарын һәм наказдарын алдыҡ. Был бүләктәр беҙгә үҙҙәре менән бергә ҙур шатлыҡ һәм көс алып килделәр. Бының өсөн атайҙарыбыҙға, әсәйҙәребеҙгә, ҡатындарыбыҙға һәм балаларыбыҙға боевой рәхмәт әйтәбеҙ;

Алдыбыҙҙа торған боевой хәрәкәттәр ваҡытында, һеҙҙең наказығыҙҙы үтәү юлында ҡаныбыҙҙы, йәнебеҙҙе аямайынса һуғышырға, немец эттәрен аҙағына тиклем тар-мар итергә һүҙ бирәбеҙ.

Беҙҙең подразделение уҙған боевой хәрәкәттәрҙә лә насар һуғышманы. Быны ст. лейтенант Бәдри Мамбеткулов, ст. сержант Низам Нуретдинов, сержант Сәйфулла Солтангәрәев, Сәхиб Гәрәев, Ниғмәт Әхмәтьянов Һәм Сафа Исмәғилов иптәштәрҙең орден һәм медалдәр менән наградланыуы ла күрһәтеп тора.

Унан һуң беҙ, актив боевой хәрәкәттәр бармаған саҡта ла немецтәргә тынғы бирмәйбеҙ, дошманды сүпләп үлтерә торабыҙ. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта Салихов Салимьян - 25, Салауатов Һиҙиәт - 18, Ғәбделхаҡов Суфияр - 12, Муллабаев Нәғим - 17, Күҫәпҡулов Ғәлиаскар - 16 немецте үлтерҙеләр.

Киләсәк һуғыштарҙа ла беҙ һеҙҙең битегеҙгә оят килтермәбеҙ. Дошманды аяуһыҙ ҡырырбыҙ, һөйөклө атабыҙ һәм наркомыбыҙ бөйөк Сталиндең боевой приказын намыҫ менән үтәп, тыуған илгә, ағайҙарыбыҙға, әсәләребеҙгә, ҡатындарыбыҙға һәм балаларыбыҙға данлыҡлы еңеү алып ҡайтырбыҙ.

*Подразделение исеменән:*
*Ст. лейтенант Мамбеткулов Б. Политрук Ахметов С. К. Лейтенант Ғафаров, Политрук урынбаҫары Якупов. Сержант Нуриев Т. Ҡыҙыл армеец Мөләков һәм Әмирханова.*
*31 октябрь 1942 йыл.*

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Иң төүҙә иғтибарыбыҙҙы төньяҡ-көнбайыш төбәккә йүнәлтәбеҙ. Дөйөм алғанда, башҡорттарҙа 40-тан ашыу ырыу бар, уларҙың һәр береһенең ҡорон, йыйынын үткәреү планлаштырыла.***



# БАШҠОРТ

## туҙға, ташҡа

**Төүҙә һүҙ булған, кешеләр һүҙҙең ҙур көсөн, ҡеүәтен, уның әһәмиәтен борондан аңлаған. Һүҙ, тел аша телдән-телгә күскән тарих, һуңыраҡ аҡ ҡағыҙ биттәренә төшөп, беҙҙең көндәргә лә килеп еткән. Бөгөн дә һүҙ бар, бөгөн дә ул халыҡ аңына ҙур йоғонто яһай, әммә күп осраҡта кеше үҙе лә аңламаҫтан был һүҙҙе булдырыу, берләштереү маҡсатында түгел, киреһенсә, тарҡатыу өсөн ҡуллана, тарихты үҙгәртергә, уны боҙоп күрһәтергә тырыша. Әммә туҙға яҙылған, ташҡа баҫылғанды соҡоп ҡына бөтөрөп булмай, ул иң элек халыҡ хәтерендә, ҡан хәтерендә урын алған. Ошо әҙмә-әҙлелек, ошо сылбыр бөгөн бер-береһенә ялғана бара шикелле. Башта тыуған һорауҙарға анығыраҡ һәм тулы яуап алыу өсөн редакцияға Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары - Башҡортостандың Милли архивы хеҙмәткәре, Ҡоролтайҙың Башҡорт халҡын үҫтереү һәм тарих комиссияһы етәксеһе, тарихсы Азат ЯРМУЛЛИНды һәм БР Стратегик тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре, Ҡоролтайҙың "Без башҡортлар" проекты етәксеһе, этнограф Юлдаш ЙОСОПОВты саҡырҙыҡ.**

**Быға тиклем, йәғни былтыр Башҡортостанда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡорт теле йылын иғлан иткәйне. Тарихтан белеүебеҙсә, иң тәүҙә һүҙ булған бит инде. Башҡорт теле йылы Башҡорт тарихы йылына ниндәйҙер һуҡмаҡ һалды, тип әйтергә мөмкиндер, сөнки һүҙҙән, телдән башлап тарих яҙыла…**

**Азат Ярмуллин:** Быға тиклем Ҡоролтайҙа, ғөмүмән, ундай тәжрибә юҡ ине, йәғни йылдар республика Башлығы тарафынан иғлан ителә, ә башҡалар шул йүнәлештә эшләй. Шуға был осраҡта ижтимағи ойошма иғлан иткән йыл, бәлки, пандемия арҡаһында тулыһынса тормошҡа ла ашмағандыр, әммә йылдың башы-аҙағы, уның ниндәйҙер маҡсаттары булыуын, ошо йүнәлештә эш барыуын, уның тәртипкә һалыныуын күрһәтте һәм ошо берләшеүҙе дауам итеү маҡсатында быйыл Башҡорт тарихы йылы тип иғлан итергә булдыҡ.

**Юлдаш Йосопов:** Тулыһынса килешәм, әлбиттә, тәүҙә һүҙ булһа, ул икенсе көнөнә тарихҡа әйләнә, һүҙ ярҙамында, тел ярҙамында тарих яҙыла. Логик яҡтан ҡараһаҡ, иң тәүҙә Башҡорт теле йылын үткәрҙек, быйыл - Башҡорт тарихы йылын. Шунан яйлап башҡа темаларға ла күсергә мөмкин. Әлбиттә, бындай эш ижтимағи, йәмғиәти проект булһа ла, уны башҡарыу күп көс, әүҙемлек талап итә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, Башҡорт теле йылы бик һөҙөмтәле булды, сөнки беҙҙең команда - этнографик төркөм төньяҡ-көнбайыш райондар менән эшләгәс, уның һөҙөмтәһен нимәлә күрҙек: былтыр 25 апрелдә башҡорт теленән диктант яҙыу һәм теләүселәрҙең ошо диктантты төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙыу мөмкинлеге булды. Был үҙенә күрә хәл иткес йүнәлеш булды. Мәҫәлән, диктант яҙыуҙа барлығы 300 меңдән ашыу кеше ҡатнашһа, шуларҙың 50 меңдән ашыуы төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙҙы.

**Азат Ярмуллин:** Быға тиклем күп иғтибар бирелһә лә, төрлө концерттар, мәҙәни һәм башҡа саралар уҙғарылһа ла, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының ұҙанында пазл тулы түгел, йәғни тулы картина булдырыу өсөн ниндәйҙер элемент юҡ йәки тап килмәй ҙә ҡуя ине. Был элемент, әлбиттә, тел. Һәм ошо тура килмәгән пазл ныҡ ҡамасауланы, сөнки тарихыбыҙ - башҡорт, милләтебеҙ башҡорт, телебеҙ - башҡорт теленә оҡшамаған. Ошо йылдарға һуҙылған тулмаған пазлды былтырғы диктант тапты һәм урынына һалды, тип әйтергә була. Хәҙер инде төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, "беҙ - башҡорт, телебеҙ ҙә башҡорт теле", тип ышаныслы әйтә.

**Һүҙемде ни өсөн Башҡорт теле йылынан башлап киттем, сөнки башҡорттар ирҙенлектә йәшәп өйрәнгән һәм яйлап ҡуҙғала, яйлап, тәмләп кенә эшләй һәм ул ниндәйҙер күтәрелешкә барып етеүгә йә иғлан ителгән йыл бөтә, йә ул сара туҡталып ҡала. Был осраҡта инде ошо Башҡорт теле йылы күтәрелешкә килеп етеүгә уны Башҡорт тарихы йылы эләктереп алды һәм артабан дауам итәсәк. Был йылға ниндәй пландар менән аяҡ баҫаһығыҙ?**

**Юлдаш Йосопов:** Пландарыбыҙ бик ҙур һәм үҙемдең өлөшкә ҡағылғанын ғына әйтеп үтәйем. Мин ырыуҙар хәрәкәтен тормошҡа ашырыу өсөн яуаплы. Ырыуҙар ҡоро, ырыуҙар хәрәкәтенең нигеҙен, белеүебеҙсә, уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында арҙаҡлы яҙыусы Булат Рафиҡов башланғыслыҡда юрматылар һала. Артабан уны мендәр, табындар һәм башҡалар күтәреп ала. Әлеге ваҡытта йыл һайын "Табынфест" үтә. Ғафури, Тәтешле, Учалы районы халҡы был фестивалдә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән бик әүҙем ҡатнаша. Әммә әлегәсә ырыу ҡорҙары, ырыу йыйындарын үткәреү системаға һалынмаған, кем нисек теләй, нисек ҡарар итә, шулай эшләп килделәр. Бөгөн беҙҙең маҡсатыбыҙ барлыҡ ырыу ҡорҙарын системалаштырыу һәм уның артабанғы йылдарҙа ла эшләүен тәьмин итеү.

Әлбиттә, иң тәүҙә иғтибарыбыҙҙы төньяҡ-көнбайыш төбәккә йүнәлтәбеҙ, сөнки уларға даими иғтибар кәрәк, ләкин көньяҡ, көнсығыш ырыуҙары ла ситтә ҡалмаясаҡ. Дөйөм алғанда, башҡорттарҙа 40-тан ашыу ырыу бар, уларҙың һәр береһенең ҡорон, йыйынын үткәреү мөмкин булырмы, белмәйем, әлеге ваҡытта беренсе кварталға 10-11 ырыу йыйынын үткәреү планлаштырылған. Беренсе ырыуҙар ҡоро Бөрйән районында үтә, унда Елдәк башҡорттары йыйыла һәм йыябыҙ ҙа, сөнки әлегә тиклем елдәктәр ырыуҙар хәрәкәтендә бик әүҙем ҡатнашмаған. Ошо йыйын артабанғы бер-



ләшеүгә этәргес булыр тип уйлаймыҙ.

Ырыуҙар хәрәкәтенең үҙенсәлеге бар: былтыр ырыу гербтарын эшләй башланыҡ. Нимәгә бындай иғтибар? Сөнки һәр башҡорт ырыуының үҙенең айырым атрибутикаһы, фәнни телдә әйткәндә инсигниялары - хоҡуҡ символдары: ағасы, ҡошо, тамғаһы, ораны, ҡайһы бер ырыуҙарҙың хатта тимер күлдәге (кольчуга) бар. Риүәйәттәр, шәжәрәләр буйынса ошо инсигниялар Сыңғыҙхан тарафынан башҡорт бейҙәренә бирелгән. Беҙ ошо атрибуттарҙы алып, уларҙы герб формаһында дөйөмләштерәбеҙ, йәғни заманса интерпретацияла эшләйбеҙ. Ул геральдика ҡағиҙәләре буйынса башҡарыла, бының өсөн Мәскәүҙән профессиональ геральдисты саҡырҙыҡ. Әле ул 10 гербтың проектын эшләне. Ошо йыйындарҙа беҙ проекттарҙы халыҡҡа күрһәтәбеҙ һәм улар үҙҙәре һайлай, бәлки, ниндәйҙер төҙәтеүҙәр ҙә индерерҙәр, һәм ниндәй проекты раҫлайҙар - шул ырыу гербы булып торасаҡ. Дөйөм алғанда, гербтарҙы тәҙәү, әлбиттә, новаторлыҡ түгел, беҙ бары тик булған символдарҙы гербҡа индерәбеҙ генә, башҡорт геральдикаһы традицияһын булдырабыҙ. Һәм был гербтарҙың презентацияһы менән Рәсәй, хатта халыҡ-ара кимәлгә сығырға була.

Былтыр беҙҙең башҡорт ауылдарының һәм ырыуҙарының этнографик картаһы булдырылды, ул инде Рәфил Аҫылгужин тарафынан эшләнде. Әлеге ваҡытта был картала 2500-ҙән ашыу ауыл теркәлгән, һәр кем шул картанан ниндәй ырыуға ҡарағанлығын, ырыуҙаштары ҡайҙа йәшәгәнлеген, улар нисек таралып ултырғанын белә ала. Картаны ҡағыҙ вариантта эшләтәбеҙ һәм Ҡоролтайҙың сараларында райондарға, төбәктәргә бүләк итәсәкбеҙ. "Бәйләнештә" социаль селтәрендә "Без башҡортлар" тигән төркөм бар, картаны шунда табырға мөмкин. Тиҙҙән айырым ресурс булдырырбыҙ тип ниәтләйбеҙ. Әле Башҡорттар.ру тигән сайт бар, бәлки, шунда һалырбыҙ, теләгән кеше уны яндекс, гугл аша ла таба ала. Шулай уҡ республиканың көнбайышында (22 район) һәм төбәктәрҙә (Свердловск өлкәһе, Пермь крайы) йәшәгән башҡорттарға бағышланған "Без башҡортлар" тигән айырым белешмәләр әҙерләнек, унда уларҙың тарихы, мәҙәниәте, кейеме, биҙәүестәре, көнкүрештәре тураһында, шәжәрәләре буйынса мәғлүмәт тупланған.

***Сөнки һәр башҡорт ырыуының үҙенең айырым атрибутикаһы, фәнни телдә әйткәндә инсигниялары - хоҡуҡ символдары: ағасы, ҡошо, тамғаһы, ораны, ҡайһы бер ырыуҙарҙың хатта тимер күлдәге (кольчуга) бар. Риүәйәттәр, шәжәрәләр буйынса ошо инсигниялар Сыңғыҙхан тарафынан башҡорт бейҙәренә бирелгән. Беҙ ошо атрибуттарҙы алып, уларҙы герб формаһында дөйөмләштерәбеҙ, йәғни заманса интерпретацияла эшләйбеҙ. Ул геральдика ҡағиҙәләре буйынса башҡарыла, бының өсөн Мәскәүҙән профессиональ геральдисты саҡырҙыҡ. Әле ул 10 гербтың проектын эшләне. Ошо йыйындарҙа беҙ проекттарҙы халыҡҡа күрһәтәбеҙ һәм улар үҙҙәре һайлай, бәлки, ниндәйҙер төҙәтеүҙәр ҙә индерерҙәр, һәм ниндәй проекты раҫлайҙар - шул ырыу гербы булып торасаҡ.***

**Ошо айырым атрибутика булыуы, елдәктәрҙең ырыуҙар хәрәкәтенә бик ҡушылмауы үҙе уҡ шуны раҫлай түгелме - башҡорттар ырыу-ырыу булып йәшәгән дә, ил-йортҡа хәүеф янағанда берләшкән, ә башҡа ваҡытта үҙ ҡағиҙәләренә буйһонған, үҙ биләмәһендә үҙ хәстәрҙәре менән булған…**

**Азат Ярмуллин:** Барыһы ла үҙ ҡанундары менән йәшәгән тип әйтеп булмай, барыһына ла бер дөйөм закон булған. Иң ҡыҙығы шунда - башҡа дәүләттәрҙә хан берләштерә, хан туплай, дәүләтселек барлыҡҡа килә. Ә башҡорт халҡында бик уникаль күренеш күҙәтелә: халыҡ милләт булып формалашҡан һәм 9-сы быуаттарҙа уҡ милләт булараҡ телгә алына. 13-сө быуаттарҙа ниндәй дәһшәтле яу килгән, ниндәй ҡатмарлы осорҙарҙа башҡорттар милләт булып һаҡланып ҡалған. Апырыҡ: көслө дәүләттәр составында булғанбыҙ, ә нисек һаҡланып ҡалғанбыҙ? Мәҫәлән, Алтын Урҙа барлыҡҡа килгәндә башҡорттар ырыу-ырыу булып йәшәй. Һуңынан Себер ханлығы, Ҡаҙан ханлығы тарҡала - башҡорт халҡы юғалмаған. Мәскәү кенәзлеге яйлап Рус батшалығына, һуңынан Рәсәй империяһына әүерелә - барыбер башҡорт ырыуҙары системаһы һаҡлана - башҡорт милләте һаҡлана.

**Юлдаш Йосопов:** Һәр бер ырыу үҙенсә йәшәгән, тип әйтеү дөрөҫ түгелдер ул, барыбер бер дөйөм ҡанун булған. Ләкин ниндәйҙер халыҡтар, мәҫәлән, нуғайҙар, ҡаҙаҡтар - уларҙа, ысынлап та, власты сакралләштереү элементы бар, йәғни бер династияның алалар ҙа, мәҫәлән, сыңғыҙидтар йәки маңғыттар (Эдигей - Иҙеүкәй нәҫеле), уны сакралләштерәләр, уға бағышланған эпостар, риүәйәттәр, легендалар ижад итәләр. Ә башҡорттарҙа ундай күренеш юҡ. Башҡорттар өсөн, киреһенсә, власть сакраль түгел, шулай ҙа изгеләштереү өлөшө бар - улар үҙенең тыуған төйәгенә табына: улар өсөн географик объекттар сакраль әһәмиәткә эйә.

**Азат Ярмуллин:** Бер һүҙ менән әйткәндә - демократия. Бында горизонталь власть булған, йәғни Булат Аҙнабаев индергән полития төшөнсәһе тура килә, һәр осорҙа ла шул күҙәтелә. Хатта ихтилал ваҡыттарында баш күтәргән башҡорттарҙың етәксеһе ҡайҙа, ихтилал үҙенә ҡайҙа икәнен дә аңламаған батша властары. Кем ул, кем менән тота килеп һөйләшергә - башҡорттар барыһы ла власть. Берәүҙе баҫһаң, икенселәре килеп сыға, икенселәр күтәрелә. Миненсә, ана шул бик һөҙөмтәле система булған.

Ул ғына түгел, Петр Беренсе Рәсәй халҡын ҡолға әйләндерә - крепостнойлыҡ хоҡуҡы индерә. Был хоҡукты Башҡортостанда ла индерергә тырыша, әммә башҡорттарҙың статусы барыбер үҙгәрмәй. Шуның

***✓ Элегерәк бит башҡорттар тураһында күсмән халыҡ тип яҙғандар. Был ике төшөнсә башҡа һыймай: документаль яҡтан да хата фекерҙәрҙе инҡар итеүсе документтар бар, хатта жалованный грамота алғандар.***

# ТАРИХЫ...

## соҡоп яҙылған...

өсөн дә Сыңғыҙхан осоронан 1917 йылға тиклем аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланып килеп еткән. Шуға күрә бөгөн ырыуҙарҙы ниндәйҙер трайбализм һәм ниндәйҙер ҡырағайлыҡ тип ҡабул итеүселәр ҙә, бәлки, барҙыр, әммә тарих төбөнә төшөп тикшерә башлаһаҡ, шунда тороҡло институттарҙың әһәмиәте күренә. Ул, әгәр кәрәге булмаһа, былай ҙа юҡҡа сығыр, быуаттар буйына һаҡланып килмәҫ ине. Уның кәрәге булған, ул кешенең тормошо менән иҡтисади яҡтан ныҡ бәйле булған. Шулай уҡ, әгәр шәжәрәне ҡыҙыҡ булған өсөн генә эшләһәләр, ул күптән юғалып бөтөр ине, әммә ул һаҡланып ҡалған, сөнки хоҡуҡи документ булған. Шулай уҡ ырыу ерҙәре лә ошо документ менән туранан-тура бәйле.

**Юлдаш Йосопов:** Ырыуҙар - хоҡуҡ системаһы менән бәйле. Мәҫәлән, хәҙер ергә хужа булыуың тураһында таныҡлыҡ бирелә. Ә ул ваҡыттарҙа айырым кеше түгел, дөйөм ырыу ергә хужа була. Шуға ырыуҙы һәм шәжәрәне һаҡлау зарурлығы тыуа, сөнки шәжәрә нигеҙендә ошо хоҡуҡтарынды иҫбатлайһың.

**Азат Ярмуллин:** Шулай уҡ тағы бер ҡыҙыҡ мәл: элегерәк бит башҡорттар тураһында күсмән халыҡ тип яҙғандар. Был ике төшөнсә башҡа һыймай: әгәр ул күсмә халыҡ булһа, ни өсөн ошо ере өсөн әлегә тиклем йәбешеп ятып көрәшә һәм документаль яҡтан да хата фекерҙәрҙе инҡар итеүсе документтар бар, хатта XVI быуат уртаһында Рәсәй дәүләтенә ҡушылғас, жалованный грамота алғандар. Жалованная грамотала быға тиклем башҡорттоҡо тип һаналып килгән ерҙәр тағы бер тапҡыр раҫланып ҡуйылған. Бына көньяҡ-көнсығыш ырыуҙарҙың дүрт шәжәрәһе бар һәм шунда бик ҡыҙыҡ: Үҫәргән, Түңгәүер, Бөрйән, Ҡыпсаҡ ерҙәре шул яландағы шул өйәнкенән шул кисеүгә тиклем тип аныҡлап яҙылып бүленгән. Хәҙер уйлап ҡарайыҡ: кеше ул ваҡытта нисек күсенеп йөрөһөн, шул билдәләнгән ерҙәрҙе аша сыҡһа, ул икенсе ырыу ерҙәренә - шәхси милеккә барып сыға. XIX быуаттың урталарындағы документтарҙы ҡараһаҡ та һәр бер ауылдың ере бүленгән.

**Был тема, әлбиттә, айырым һөйләшеүҙе талап итә, һорауҙар күп. Ә әлегә, әйҙәгеҙ, Башҡорт тарихы йылы буйынса тағы ниндәй проекттарҙы тормошҡа ашырыу ҡаралған, әңгәмәне шул юҫыҡҡа төшөрәйек...**

**Азат Ярмуллин:** Бөгөн беҙ башҡорт халҡының алдында торған иң ҙур мәсьәләләрҙе билдәләйбеҙ. Тарихсы булараҡ, иҡтисади мәсьәләләргә ҡыҫылмайбыҙ, әммә улар ҙа ҙур борсолоу уята, уларҙы ла хәл итергә кәрәк. Беҙҙе, тарихсыларҙы, башҡорт халҡының берләшеү мәсьәләһе, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш төбәк борсой. Эшебеҙҙе төрлө йүнәлештә алып барһаҡ та, проекттарыбыҙ төньяҡ-көнбайышҡа йүнәлтелгән. Башҡортостандың артабанғы тотороҡлолоғо һәм үҫеше тап шул берләшеүгә ҡайтып ҡала, сөнки бөгөн тарих өлкәһендә төрлө манипуляциялар бара. Шуға күрә Башҡорт тарихы йылында бер нисә йыл элек башланған проекттарыбыҙҙы дауам итергә, яңыларын башларға булдыҡ, сөнки был - туҡтауһыҙ процесс.

Иң ҙур проектыбыҙҙың береһе - ул "Шайморатов вариҫтары". Уны 2019 йылда уҡ халыҡҡа мөрәжәғәт итеп башлағайныҡ, халыҡ йылы ҡабул итте. Анкеталар эшләгәйнек, уларға бихисап яуап алдыҡ, тимәк, халыҡҡа ҡыҙыҡ. Улар хатта ата-олаталарының документтарын сканлап килтереп бирҙе. Ә маҡсат бары тик ошо легендар дивизия яугирҙарының тулы исемлеген генә булдырыу ине. Ниндәйҙер кимәлдә быны тормошҡа ашырҙыҡ тип уйлайым, сөнки 3000 тирәһе кешенән торған исемлек эшләнек. Ошо проект өҫтөндә эшләгәндә ҡыҙыҡ факттарға юлыҡтыҡ. Беҙ, ғәҙәттә, кемдәрҙе нығыраҡ беләбеҙ? Кусимовты, Шайморатовты... Ә документтарҙы алып ҡараһаҡ, наград ҡағыҙҙары буйынса Туймазы, Борай, Яңауыл, Краснокама башҡорттары - барыһы ла башҡорттар, барыһы ла шул дивизияла хеҙмәт иткән. Мәғариф министрлығы менән дә был турала һөйләштек, хәҙер был исемлек менән мәктәп уҡыусыларын да таныштырып, ниндәйҙер конкурс формаһында өйрәнеп, тикшереп, һәр район буйынса айырым исемлек булдырып эшләргә тигән маҡсат ҡуйҙыҡ алдыбыҙға. Яугирҙарҙың исемен мәктәптәргә бирергә һәм был эште артабан да дауам итергә уйлайбыҙ.

Икенсе ҙур йүнәлеш - ул шәхестәр исемлеген булдырыу. Быға тиклем дә был эште әүҙем алып барҙыҡ, быйыл тағы ла нығыраҡ әүҙемләшербеҙ, киләһе йылда ла эште һүлпәнәйтмәбеҙ, тип уйлайбыҙ. Мәҫәлән, февралдә Муса Мортазиндың тыуыуына 130 йыл тула. Әйткәндәй, 2019 йылда башлаған эштең һөҙөмтәһен былтыр күрҙек - Стәрлетамаҡ ҡалаһында Муса Мортазинға таҡтаташ астыҡ. Ул шунда Башҡортостан етәксеһе булып эшләп киткән. Быйыл беҙҙең теләк - уның тураһында ғына һөйләмәҫкә, ә уның яуҙаштары тураһында мәғлүмәт таратырға. Шул теманы өйрәнгән кеше булараҡ әйтә алам: Мортазин яуҙаштары - ул үҙе бер плеяда. Совет-Польша фронтында йөрөп ҡайтҡандар, Башҡорт кавалерия бригадаһының составында булған шәхестәр ошонда ҡайтҡас, байтаҡ ҡына кантондарҙа ҙур ғына вазифалар биләгән, дәүләт эшмәкәрҙәре булған. Иң ҙур юғары вазифаға өлгәшкәндәре, мәҫәлән, Кинйәбай Ишмөхәмәтов - Сәрмән ауылыныҡы - ул һуңынан республиканың Һаулыҡ һаҡлау комиссары булып китә. Ғәҙелша Ейәнсурин - республика Баш суды рәйесе була. Әммә репрессияға эләгеүҙәре сәбәпле, улар тураһында онотҡанбыҙ. Муса Мортазиндың яуҙаштары Ырымбур, Ҡурған, Силәбе өлкәләрендә лә бар. Беҙ уларҙың исемдәрен тыуған яҡтарында мәңгеләштерергә өмөт итәбеҙ.



Өсөнсө проект тураһында һөйләгәндә шуны әйтеп китер инем: архивта эшләгән тарихсыбыҙ Зөфәр Ғәтиәтуллин тарафынан бик уникаль ҙур эш эшләнде. Ул 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына башҡорт кантондары буйынса ошо һуғышта ҡатнашҡан яугирҙарҙың исемлеген төҙөп баҫтырҙы. Үкенескә күрә, бөгөн был исемлек ҡулланылмай. Унда хатта яугирҙың ҡайһы ауылдан икәне лә яҙылған. Ул исемдәр төньяҡ-көнбайыш өсөн бик ҙур әһәмиәткә эйә. Әлбиттә, исемлек тулы түгел, сөнки 1830-1840 йылдарҙа ғына төҙөлгән формуляр исемлек, күптәре, бәлки, был ваҡытҡа иҫән дә булмағандыр, әммә иң ҡыҙығы шунда: ауылдарҙан ҡайһы яугир ниндәй полкта ҡатнашҡан, ниндәй наградалары булған - барыһы ла яҙылған. Ошо исемлек нигеҙендә "Мин - "төньяҡ амурҙары" вариҫы" тигән проект тәҡдим иттек. Ул исемлекте лә тиҙҙән интернетҡа сығарып, өҫтәмә материалдар ҡуйып, презентация эшләп, шулай уҡ райондарҙа, мәктәптә крайҙы өйрәнеүселәр, тарих уҡытыусылары, уҡыусылар менән бергә исемдәрен мәңгеләштереү эшен алып барырҙар тип уйлайбыҙ. Был эштә Республиканың Милли музейы ярҙам күрһәтергә вәғәҙә итте.

Быйыл тағы мөһим даталарҙың береһе - Каруанһарайҙың 175 йыллығы. Беҙ бөгөнгө көнгә тиклем уның баһаһын, ҡиммәтен һаман да белеп бөтмәйбеҙ. Әйтеп киткән Муса Мортазинды ла Өфө-Учалы тип кенә ҡарарға кәрәкмәй, бөгөн уны һәм уның яуҙаштары тураһында барыһы ла белергә тейеш. Шулай уҡ Каруанһарайҙы ла башҡорттарға бәйле күрше өлкәлә урынлашҡан мәҙәни мираҫ объекты тип кенә ҡарарға ярамай, ул халҡыбыҙ тарафынан төҙөлгән, беҙҙең милли символ. Ул ғына ла түгел, Башҡортостан Республикаһының бишеге, сөнки Башҡортостан Республикаһы шунда тыуған. Август айында уҡ БР Хөкүмәтенә тәҡдимдәр ебәргәйнек, әле ошо мәсьәлә буйынса ҡарар көтәбеҙ һәм Каруанһарайҙың 175 йыллығын байрам итеү буйынса ҡарар сығарылыр, тип өмөт итәбеҙ. Шулай уҡ мәктәптәрҙә асыҡ дәрестәр, конкурстар, ғилми-тикшеренеү эштәре ойоштороорға, хатта аҡса мәсьәләһе хәл ителһә, бәлки, Каруанһарайға сәйәхәт тигән берәй портал эшләргә күҙаллайбыҙ. Унда уның тарихы ла, йыры ла, виртуаль экскурсия ла булырға тейеш. Бөгөн техник йәһәттән мөмкинлектәр ҙур. Ул ғына ла түгел, бөгөн унда автобустар менән дә экскурсиялар ойоштороорға була. Алла бойорһа, ошо проектты ла тормошҡа ашырырға ниәтебеҙ бар.

Һәм, әлбиттә, быйыл милли хәрәкәттә ҡатнашҡан, төньяҡ-көнбайыштан сыҡҡан күп кенә шәхестәребеҙҙең юбилейҙары. Әле яңы ғына Ғәли Соҡоройҙоң юбилейы үткәйне, уның улы Ғарифулла Кейековтың апрелдә юбилейы етә.

**Юлдаш Йосопов:** Ғәҙәттә, йәмғиәттә "тарихсылар үҙҙәренә бер тема таба ла, уны сәйнәй ҙә сәйнәй", тигән ҡалыплашҡан ҡараш йәшәй. Әлеге ваҡытта беҙ икенсе төрлөрәк йүнәлеш тәҡдим итәбеҙ, йәғни халыҡ менән бергә эшләйбеҙ, халыҡты йәлеп итергә тырышабыҙ. Хәҙер донъя ла үҙгәрә һәм халыҡһыҙ, урындағы инициативаларһыҙ эшләп булмай. Хатта тарихи мәсьәләләрҙә лә халыҡты ылыҡтырырға кәрәк, улар үҙҙәре ҡатнашып, үҙҙәрен ошо ҙур мәсьәләнең бер өлөшө тип тойорға тейеш. Беҙ уларға методик йәһәттән ярҙам күрһәтәбеҙ. Әйҙә, балалар ырыу ҡошон төшөрһөн, ололар менән берлектә шәжәрәләрен төҙөһөндәр һ.б. Йылды диванда телевизор ҡарап ятып ҡына үткәреү ярамай, һәр кем ҡатнашһа, ул ҡыҙыҡлыраҡ та буласаҡ.

**Азат Ярмуллин:** Тарих кешенән айырым булырға, ситтә торорға тейеш түгел. Мәҫәлән, 1812 йылғы Ватан һуғышы, ти. Эйе, 20 полк Парижға барып еткән. Ә уны ентекләп тикшерә башлаһаң, һинең, минең, күрше ауылдан кешеләр булған икән дә! 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары менән дә шулай. Уның сафтарынан 78 Советтар Союзы Геройы сыҡҡан, Берлинға барып еткәндәр. Ә кемдәр улар? Баҡтиһәң, беҙ бала саҡта беҙҙең менән шаярып, уйнап, баштан һыйпап, яратып йөрөгән ауылдаш, күрше бабайҙар легендар дивизия яугирҙары икән! Йәғни, тарихи ваҡиғаларҙы ентекләп тикшерә башлаһаң ул яҡыная. Тарихты кемдер күңелһеҙ, эс бошорғос тема кеүек күрһә лә, ул беҙҙең бөгөнгөбөҙ, киләсәгебеҙ менән ныҡ бәйле.

**Юлдаш Йосопов:** Федераль властар тарафынан да юҡҡа ғына Халыҡ хәтере тигән портал төҙөлмәне. Был мемориалдың беренсе маҡсаты - халыҡты туплау, икенсеһе - бөгөн тарих буйынса алып барылған төрлө манипуляцияларға юл ҡуймау, сит илдәрҙең илде, халыҡтарҙы бүлгеләргә тырышыуына юл ҡуймау өсөн тарихи документты халыҡҡа сығарыу. Беҙ төбәк кимәлендә лә шундай тәьҫирҙе һиҙәбеҙ: нисек тә булһа башҡорттарҙы тарҡатырға, бүлгеләргә тырышыусылар бар. Хатта тарихты үҙгәртеп, боҙоп яҙырға ла тартынмайҙар. Ә тарихсылар өсөн төп сығанаҡ, нигеҙләү - ул тарихи документтар. Тарихи нигеҙләү юҡ икән - тарих та юҡ. Эксперттар булараҡ, беҙ быға баһа бирергә, үҙ һүҙебеҙҙе әйтергә тейешбеҙ, ләкин әлеге ваҡытта төп маҡсатыбыҙ - халыҡ үҙе аңларға, хаҡты нахаҡтан айырырға, йәғни тарихи документтар буйынса үҙе һығымта яһарға тейеш. Беҙ башҡорттарҙы ғына түгел, Башҡортостанда йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙы ла бергә туплайбыҙ, икенсе яҡтан, халыҡтың башын ҡатырырға, ялған менән алдаштырырға мөмкинлек бирмәйбеҙ.

***Башҡорт халҡында бик уникаль күренеш күҙәтелә: халыҡ милләт булып формалашҡан һәм 9-сы быуаттарҙа уҡ милләт булараҡ телгә алына. 13-сө быуаттарҙа ниндәй дәһшәтле яу килгән, ниндәй ҡатмарлы осорҙарҙа башҡорттар милләт булып һаҡланып ҡалған. Аптырарлыҡ: көслө дәүләттәр составында булғанбыҙ, ә нисек һаҡланып ҡалғанбыҙ? Мәҫәлән, Алтын Урҙа барлыҡҡа килгәндә башҡорттар ырыу-ырыу булып йәшәй. Һуңынан Себер ханлығы, Ҡаҙан ханлығы тарҡала - башҡорт халҡы юғалмаған. Мәскәү кенәзлеге яйлап Рус батшалығына, һуңынан Рәсәй империяһына әүерелә - барыбер башҡорт ырыуҙары системаһы һаҡлана - башҡорт милләте һаҡлана.***

**(Дауамы 11-се биттә).**

***✓ Тимәк, баш мөхәррирҙең ҡарашы үҙгәрә барыуы Сараның үткер тәнҡит мәҡәләләре яҙыуына ғына бәйле булмаған. Ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе уға барып етеп торған. Сара әҫеле-һыуыҡлы булып китте.***



**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**

# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

**Повесть**

Һис кенә лә был хәлдә көтмәгән Алик үкереп ебәрҙе, руле ҡулынан ысҡынды:

- Мин һеҙҙе түгел!
- Мине! Был мин!
- Мин "Лада"ны!..

- "Лада" эсендә мин! Мине урлап булмай! Борол Алексеевкаға! Борол! - Риананың ҡулына нимәлер килеп эләкте. Ә был үҙе һалып ҡуйған бита ла баһа! Ҡатын суҡмарҙы тотоп, ғәйрәтләнеп, Аликтың арҡаһын төйгөсләргә кереште.

- Алексеевка! Хәҙер мейеңде сәсрәтәм, борол шул яҡҡа! Сволочь, мине урламаҡсы!

...Сара менән кейәүе сауҙа үҙәгенән сыҡтылар. Парковкала "Рено-Логан"дың багажнигына һатып алған әйберҙәрҙе урынлаштырып торғанда кейәүе светофор эргәһенә килеп туҡтаған һары "Лада"ға иғтибар итте.

- Ҡәйенбикә, машинаңдың игеҙе лә бар икән.

"Лада"ға ҡарап тора биргәс, Сараның йөҙө ағарып китте.

- Был минең машина! Риана! - Ул бот сапты. - Эйе, эсендә ултырып ҡалғайны. Үҙе рулдә китеп бара шикелле?

- Ҡайҙа китеп бара?

- Бөгөн ирен алып ҡайтырға тейеш инек. Ай, Риана! Һуң, ул бит машина йөрөтә белмәй. Нисек... - Сара башын усланы. - Әле нисек механиканы йөрөтә? Бәләһенән баш-аяҡ... Әйҙә, туҡтата һалайыҡ.

"Лада" уның нимә әйткәнен ишетте, тиерһең, ҡыҙыл светофор янып торһа ла, шәп итеп ҡуҙғалып ары елдерҙе.

- Ай... Ҡалай борғослай, хәҙер барып төкөй инде! Ай, харап итә машинамды.

- Хәҙер-хәҙер, ҡәйенбикә... Сабыр. Машинанан бигерәк үҙен харап итмәгәйе. - Кейәүе парковканан сыға алмай эләнә, сөнки сығыр юлды икенсе машина ҡаплағайны.

Риана иһә, аҡыртып, йөрөтмәнде һаман алға ҡыуҙы. Телөй-былай кәйелгән машина, әлбиттә, патрулдәрҙең иғтибарына эләкмәй ҡалманы. Арттан ҡыуа төштөләр. Динамик аша автомобилдең номерын атап, туҡтарға ҡуштылар. Был тауышты инде эштәрен бөтөрөп, өйҙәренә ҡайтырға сыҡҡан Рауил менән Ирек тә ишетте.

- Атай, әсәйҙең машинаһына туҡтарға ҡушалар.

- Юҡтыр, ул бында нишләп йөрөһөн!

Был мәлдә уларҙың "Тойота"ны боролошҡа яҡынлағайны.

- Ана бит! Күрәһеңме, һары "Лада"! Патруль машинаһы баҫтыра.

Һары "Лада"! Рауил бер мәлгә телһеҙ ҡалды, күҙҙәрен селт-селт йомоп алды:

- Хәҙер ҡыуып етәбеҙ.

- Ҡыҙма, атай, ана, беҙгә ҡыҙыл янды!

- Барыбер ҡыуып етәбеҙ! - тине светофорҙы ашарҙай булып текләгән Рауил.

Риана яман тауыш менән һаман Аликты алға табан ҡыуҙы:

- Алексеевка!

"Лада" Салауат Юлаев проспектына килеп төштө.

- Нимә булды был Сара Наилевнаға? Туҡтарға уйламайҙа, тине гаишник Шамил һәм рулде тотоп барған иптәшенә ҡысҡырҙы. - Үтеп кит, улайһа, ҡаршыһына сыҡ!

- Нишләп туҡтамай? - Ата менән ул бер-береһенә ҡараштылар.

- Уй, ана, юлдан ҡыйыш төшөп китә яҙҙы. Нишләүең был, Сарам, йәнкиҫәк! - тип ҡысҡырып ебәрҙе Рауил. Атаһының былай өҙгөләнеүен дә, әсәһенә "йәнкиҫәк" тип өндәшкәнен бер ҡасан да ишеткәне булмаған Ирек күҙҙәрен ҙур асып, гәжәп итеп атаһына ҡараны, шунан йөҙө яҙылды, ауыҙы йырылды. Йәнә атаһына ҡараны, йәнә "Лада"ға төбәлде. Һәм шулай ирәбе йылмайған килеш бара бирҙе.

- Туҡтамай, алйот. Туҡтай белмәйме икән әллә! - тип өҙгөләнде "Рено-Логан"да ултырған Сара.

- Туҡтама, үлтерәм! Мейеңде сәсрәтәм! - тип аҡырҙы Аликҡа "Лада" эсендә ултырған Риана.

Нияз ҡатынын матур итеп ҡаршы алыр өсөн сәскәләргә заказ биргәйне инде, тиҙ хеҙмәтләндерәләр икән, бүләкте һә тигәнсе килтереп тә еткерҙеләр. Ир ҙур сағыу гөлләмә тотоп, ҡатынын ҡаршы алыр өсөн, болдорға сығып баҫты.

Һары "Лада", уның артынан гаишниктар, уның артынан "Рено-Логан", уның артынан "Тойота" теҙелешеп, йылт-йылт итеп, Ағиҙел йылғаһы аша үтеп киттеләр.

* * *

Сара "Внимание. Розыск!" тигән иғландар таҡтаһы эргәһенән үтеп барғанда, нишләптер, бер фотоға иғтибар итте. Таныш һымаҡ тойолдо уға был ир һүрәте. Маңлайында яра эҙе бар. Бағыу иғланда ла ошо тамғаны яҙып ҡуйғандар. Ысынлап та, ҡайҙа күрҙе һун ул был әҙәмде? Сара күҙен йомоп, иҫенә төшөрөргә тырышты. Эйе-эйе, Черниковкала! "Социаль хеҙмәткәр" булып Сөйөм ҡарсыҡтың иҙәнен йыуып сыҡҡандан аҙаҡ, икенсе ҡатҡа күтәрелгәйне, ишек ҡыңғырауына баҫыуы булды, уны бер әҙәм дөрләтеп эскә тартып алғайны, ә ҡашы өҫтөндәге йәрәхәт эҙенә иғтибар итмәү мөмкин түгел ине. Шәйт, иғланда уның һүрәте. Хәйер, ер йөҙөндә яралы, йөйлө бәндәләр етерлек. Ҡатын тағы икеләнде. Шулай ҙа эскә шом һалырлыҡ, хаяһыҙ ҡарашты онотоп буламы ни?.. Сара тағын үҙен тынысландырырға тырышты: "Ҡуйсы, ер йөҙөндә хаяһыҙ ҡарашлылар ҙа етерлек. Булышма буш менән!"

Өйгә ҡайтып ингәс, ноутбукты тоҡандырҙы. Ҡапыл көнөлдә шиғри юлдар тыуҙы. Һәм Сара ихластан ижадҡа тотондо. Ниңә тотонмаҫҡа, эсендә урғылған уй-тойғоларын ул да рифмаға һала ала бит. Башта дүрт юллыҡ тыуҙы, фекер әйтеп бөтөлмәгәс, йәнә строфалар өҫтәлде. Сара тормош, кешеләр мөнәсәбәте тураһында уйланды. Уға ла тормош һынауҙарҙы үтергә тура килде, ауырлыҡты йырып сығаһың икән - һин енеүсе. Ундай енеүҙәр етерлек. Тормош - алыш, тигәндәре раҫҡа тура килә. Шулай ҙа иң насары - бер-береңә булған битарафлыҡтыр. Күҙ алдына йәнә ҡаш өҫтөндәге шрамы булған ир килеп баҫты. Әгәр ҙә иғланда яҙылған маньяк һәм Сара күргән ир бер кеше булып сыҡһа, ул үҙенең битарафлығы менән кеше үлтереүсегә ярҙам итмәйме? Тейешле органдар тегенең шәхесен асыҡларға тейеш. Быны өсөн Сараның бер шылтыратыуы етә. Ҡатын ҡулына телефонын алды, төймәһенә баҫты. Ләкин бер секунд эсендә лә хәл иткес ваҡыт була. Миллисекунд. Тимәк, кемдер уға саҡ ҡына алдараҡ шылтыратты. Сара дисплейға күҙ һалды. Рәүзәт! Һөнәрҙәше битараф кеше түгел, бына шулай юҡ-юҡта шылтыратып, хәл белешеп тора. Кәйефе күтәрелгән Сара уға сюрприз эшләмәк булды һәм, Рәүзәт сәләм бирмәҫ элек өлгөрөп ҡалайһым тип, әле генә күңеленән төшкән шиғри юлдарҙы уҡый башланы:

*- Һатлыҡ йәнһең, һатлыҡ йәнһең, белмәгәнмен,*
*Ике йөҙлө икәнеңде һиҙмәгәнмен.*
*Дуҫым, тиеп, серҙәремде уртаҡ иттем,*
*Ә һин арттан ағыу тулы уҡтар аттың.*

Тик уҡып бөтөргә өлгөрмәне, Рәүзәт уны бүлдерә-бүлдерә үҙ хәбәрен һөйләргә керешә. Сара башта бер нәмә лә аңламаны. Шунан бер заман ҡулынан саҡ трубкаһын төшөрөп ебәрмәне.

- Сара, туҡта! Сара, мине гәйепләмә. Һинең алда бер ниндәй гәйебем юҡ. Ғирфан Рәсүлевич үҙе һинең турала һорашты. Мин фекеремдә генә әйттем. Бер ниндәй ҙә насар уйҙан әйтмәнем...

Сара телефонын һүндерҙе һәм күҙҙәре даһрайған килеш ултыра төштө. Әле яңырыған һүҙҙәр һаман аңына барып етмәне. Бер минуттан тамаҡ төбөнән ухылдаған өн сыҡты. Рәүзәт! Тап ошо кешегә ул бөтөн серҙәрен аса торғайны. Тап ошо кешегә редакцияла булған һәр хәл-ваҡиғаға үҙ мөнәсәбәтен йәшермәй һөйләй торғайны. Тимәк, баш мөхәррирҙең ҡарашы үҙгәрә барыуы Сараның үткер тәнҡит мәҡәләләре яҙыуына ғына бәйле булмаған. Ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе уға барып етеп торған. Сара әҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ғирфан Рәсүлевичтың эшкә саҡырғанын да Рәүзәткә сер итеп кенә әйткәйне. Һәм бына һөнәрҙәшенә шиғырын уҡып бөтөргә лә өлгөрмәне, шеш һытылды... Сейле-бешле булһа ла, юҡҡа ғына яҙылмаған икән. Рифмаға һалынған юлдар, ысынлап та, ике йөҙлө дуҫты фашларға ярҙам итте.

*Юҡ,ҡурҡыныс түгел миңә һатлыҡ дуҫым,*
*Мин көслөмөн хаҡ намыҫым, иман менән,*
*Йоҡмай миңә бысраҡ һүҙең, яуыз уйың,*
*Киләсәккә бағам ҙур ышаныс менән.*
*Иң яманы - бер-береңдең йәнен ҡыйыу,*
*Беҙҙең бурыс был донъяла - әҙәм булыу.*
*Көнөлдәге яҡтылыҡты ергә һибеү,*
*Ауырлыҡтар килгән саҡта бергә булыу.*

Аҙаҡҡы дүрт юллығы өсөн яҙылғайны был шиғыр. Кеше үлтереүселәр тураһында уйланып, әрнеп яҙғайны Сара. Ҡаш араһында яра эҙе булған әҙәм тынғылыҡ бирмәгәнгә. Ә бит был шиғырында Сара алдашманы - кеше үлтереүсе әҙәм күпкә ҡурҡыныс. Байтаҡ йылдар бергә ултырып эшләгән һөнәрҙәше уны үҙенә тип ҡабул итте. Сара йәнә ҡулына телефонын алды. Полицияға шылтыратырға кәрәк, бәлки, улар эҙләгән кеше Енеү урамындағы ике ҡатлы йортта йәшенеп яталыр? Туҡта, үҙенең дә күптән Трофимычты күргәне юҡ. Бәлки, башта ҡарт янына барып килергәлер? Тормошта ыңғай һәм кире геройҙар бар. Трофимычҡа ҡарата икеһен дә әйтергә була. Эйе, тик ошо ҡарт ярҙамында Сара цехҡа инеп, кәрәкле документтарҙы эләктерә алды. Тап уның ярҙамында кеше ғүмере менән "шаярған" араҡы яһаусылар шайкаһын фашлай алдылар. Ундайҙар һәр саҡ ҡуләгәлә. Улар тураһында берәү ҙә белмәй. Улар маҡтауға, иғтибарға мохтаж да түгелдәр. Улар рәхмәт әйтеүҙе лә көтмәйҙәр. Ләкин улар бар. Әгәр ҙә Сара хәҙер Трофимыч янына бара икән, һис шикһеҙ, маңлайына тамға һалынған кешекәй тураһында ниндәй ҙә булһа мәғлүмәт ишетәсәк, тимәк, көнөлдә тыуған һорауҙарға асыҡлыҡ индерәсәк. Сара сумкаһын ҡулына алды һәм ихатаға сыҡты. Ҡаршыла - ике автомобиль. Ҡатын "Тойота"ға ҡарап торҙо. Рауилдың: "Был ҡәйнәмде йөрөтә торған машина була инде", - тигәнен иҫенә төшөрөп, йылмайып ҡуйҙы һәм мажаралар яратҡан "Лада"һына табан атланы. Сөләймәнгә тип нәҙерләнгән был иҫке тимер аттың хужабикәһенән айырылғыһы килмәй. Кейәү Шамунға алып ҡайтманы. "Сөләймән бер сығып ҡараған мәлендә генә лә асҡысын юғалтып инде. Шул арҡала нисәмә кешене бәләгә тарыта яҙҙы. Ҡотортмайыҡ. Беҙҙең малай үҙенә ҡыйбатлы тәтәй ҡарағанһ, ана, ахыуы менән булышһын," - тине кейәүе.

"Бер нәмәне лә онотоп ҡалдырманыммы?" Ҡатын кеҫәһендәге газ баллонына тиклем барланы. "Нимәнелер онотҡан кеүекменсе. Башың үҙ урынындамы, Сара? Урыныңда! Бәй, шулай булғас, ҡуҙғалырға ваҡыт!"

Сара "Лада"һына инеп ултырҙы, рулдә йәтешләп тотто.

- Йә, Лада әхирәт, яңы... - ул туҡтап ҡалды.

"Яңы эҙләнеүҙәргә", тиергәме? Әллә "яңы мажараларға" тиһә, дөрөҫөрәкме? Бәй, бер һүҙ бар бит! Ул хатта брендҡа әйләнеп бара шикелле. Хәйер, мода ла тиҙ үҙгәреүсән.

- Алға!

Был мәлдә оҙаҡ дауаханала ятып, операция үткәреп, сәләмәтләнеп эшкә сыҡҡан Ғирфан Рәсүлевич секретары Нәйрәгә эш ҡуша ине.

- Сара Ғәбитоваға шылтырат. Килеп етһен.

Нәйрә күҙҙәрен селт-селт йомоп алды.

- Ғирфан Рәсүлевич, уға, һеҙ Сараны эшкә алмайһығыҙ икән, тигән хәбәр еткергәндәр. Кемдер һеҙгә Сара Наил ҡыҙы тураһында яманлап әйткән, имеш...

- Бәй, һәр әйтеүсенең фекерен тыңлап, баш ҡағып ултырһам, мин нишләп баш мөхәррир булырға тейешмен? Үҙ фекерем юҡмы әллә минең? Шылтырат.

Нәйрә, баш ҡаға-ҡаға сәбәләнеп, Сараға шылтыратырға тотондо. Тик яуап биреүсе генә булманы. "Нимәнелер онотҡан кеүекменсе", тигәйне Сара, ә телефоны өйөндә тороп ҡалғаны уның башына ла инеп сыҡманы. Телефон туҡтауһыҙ шылтыраны ла, шылтыраны.

**(Аҙағы. Башы 2020 йылдың 47-се һанында).**

***✓ Төҙөлгән шәжәрәләрҙе туплаған, тәртипкә килтергән бер портал эшләргә кәрәктер. Хатта ҡайһы бер ауылдарҙа шәжәрәләр эшләнгән булһа, икенсе кешеләргә еңелерәк буласаҡ, сөнки бөләкәй ауылда ярты ауыл туған булып сыға.***



# БАШҠОРТ ТАРИХЫ...

## туҙға, ташҡа соҡоп яҙылған...

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**▶ Бөгөн күптәр нәҫел-нәсәбен барлап, уларҙан һорашып, үҙенсә шәжәрә төҙөй, әммә уны нисек итеп рәсми рәүештә раҫлатырға белмәй, бының өсөн йәки белгестәрҙән шәжәрә төҙөтөр өсөн аҡса түләргә кәрәк, уның суммаһы ла тирбәлеп тора. Ауыл халҡы өсөн был ҙур аҡса. Юлдаш Мөхәмәт улы, бер ваҡыт әңгәмәләшкәндә һеҙ ҡаҙаҡтарҙың тәжрибәһе тураһында һөйләгәйнегеҙ: унда "Алаш" предприятиеһы ингән кешенең ҡайҙан, кем, исем-фамилияһын һораша ла, сыҡҡан ваҡытта ҡулына шәжәрәһен тотторop сығара, тигәйнегеҙ. Ни өсөн беҙҙә шулай эшләнмәй, йәғни шәжәрә төҙөү килем сығанағына әйләнгән? Бушлай шәжәрә төҙөп булмаймы?**

**Азат Ярмуллин:** Бөтә материалдар архивта ята, бөгөнгө көндә күп кенә Хөкүмәт, дәүләт учреждениелары алдына шундай бурыс ҡуйылған - аҡса эшләү. Был архив эшмәкәрлегенә дәүләт заданиеһы буларак ингән, улар күпмелер суммала түләүле хеҙмәт күрһәтергә тейеш. Бәлки, һеҙ әйткәнсә, бушлай шәжәрә төҙөүсе ойошмалар булдырылһа, ҡараш икенсерәк булыр ине. Минә билдәле булыуынса, әлегә архивтың ундай мөмкинлектәре юҡ. Хатта түләүле хеҙмәт формаһында эшләгәндәрҙе лә сикле генә.

**Юлдаш Йосопов:** "Алаш" компанияһы - ул шәхси инвестициялар нигеҙендә эшләй, йәғни уны бер кеше финанслай. Ләкин Башҡортостан Ҡаҙағстан проекттарының күбеһен уҙҙыра башланы, сөнки архив материалдары интернетка сығарылды һәм теләгән кеше интернет аша үҙенең шәжәрәһен төҙөй ала. Берҙән, шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһынған кешенең барыбер үҙе эшләй башлаған ниндәйҙер мәғлүмәте була, ул нәҫел-нәсәбенән һорашып белешә. Районда булған хужалыҡ кенәгәләренән мәғлүмәт ала ала, улар бушлай бирелеүе мөмкин. Һуңынан интернетка инеп, БашАрхив сайтында 1917 йылдағы халыҡ иҫәбе материалдары менән таныша. Әгәр бәхет йылмайһа, йәғни шул ваҡытта 94 йәште үткән олатаһы йәшәгән булһа, 1859 йылғы ревизия мәғлүмәттәренә бара ла сыға.

**Азат Ярмуллин:** Бөгөн бер генә проблема бар, бигерәк тә мосолман халҡы алдында, заманында, ЗАГС булмағас, үлем-тыуымдарҙы муллалар метрикаға яҙып барған. Улар ғәрәп графикаһында яҙылған һәм уларҙы уҡыу проблема булыуы ихтимал. Был - архив хеҙмәте, унда белгестәр бар, ә ҡалған документтар буйынса артыҡ проблема юҡ.

Тағы бер фекер тыуып тора, бәлки, киләсәктә 2006 йылда Шәжәрә байрамын үткәреү тураһында ҡарар сыҡҡандан алып Башҡортостанда төҙөлгән шәжәрәләрҙе туплаған, тәртипкә килтергән бер портал эшләргә кәрәктер. Ул эште еңеләйтер ине. Иманым камил, хатта ҡайһы бер ауылдарҙа шәжәрәләр эшләнгән булһа, икенсе кешеләргә еңелерәк буласаҡ, сөнки, ғәҙәттә, бәләкәй ауылда ярты ауыл туған булып сыға.

**Юлдаш Йосопов:** Быны эшләргә мөмкин. Информатизация, цифровизация тигән төшөнсәләр шуға керә бит инде. Мәҫәлән, беҙ ике шәжәрәне алабыҙ, уларҙы интернетка фотоға төшөрөп йәки сканлап ҡына һалмайбыҙ, ә яҙма мәғлүмәт индерәбеҙ. Шунан, мәҫәлән, өс быуын ҡалала йәшәгән бала йәки оло кеше махсус порталға керә, унда барлыҡ мәғлүмәт тупланған, ул бары тик эҙләү системаһында фамилияһын, исемен, атаһының исемен, ауылын йыя һәм шәжәрә килеп сыға. Тағы ла ҡатмарлыраҡ, әммә тормошҡа ашырылырлыҡ вариант бар: барлыҡ ревизия сказкаларын, ихата буйынса иҫәп алыуҙарҙы, метрик кенәгәләрҙе цифрлаштырып, агрегатор-расшифровкалаусыға индерергә кәрәк. Ул үҙе ниндәй фамилия, уның ниндәй варианттары бар, сағыштырып ҡарай, автомат-агрегатор үҙе ошо баҫҡыстарҙы (сылбырҙы, ботаҡты, тармаҡты) төҙөй ала. Мәҫәлән, "Бәйләнештә", Фейсбук кеүек социаль селтәрҙәрҙә кеше теркәлә, үҙен, атаһын, олатаһын һәм ҡарт олатаһын күрһәтә, һәм уны автомат-агрегатор үҙе ошо сылбыр менән бәйләй, йәғни социаль селтәргә теркәлгәндә үк аккаунты менән бер шәжәрәгә барып эләгә. Икенсе яҡтан, ырыу гербы ла, барлыҡ атрибуттар килеп сыға. Бөгөн социаль селтәрҙәрҙә беҙҙең яңылыҡтар таҫмаһы кемдәр дуҫтарҙа тора - шулар буйынса формалаша, ә шәжәрә агрегаторы эшләнә, яңылыҡтар таҫмаһы туғандарыңдың яңылыҡтарынан булдырылыр ине. Әммә был бөгөнгө түгел, ә иртәгәһе көн.

**Азат Ярмуллин:** Миненсә, быны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында тағы ла Халыҡ проекты итеп башларға мөмкин булыр тип уйлайым. Әгәр халыҡҡа мөрәжәғәт итһәк, улар шәжәрәләрен сканлап ебәрә ала. Райондарҙа шәжәрә төҙөгән крайҙы өйрәнеүселәргә улар бер төрлө һәм системалы эшләнһен өсөн методик ярҙам күрһәтергә мөмкин. Йәғни ҡәләм йәки ручка менән яҙып, фотоға төшөрөп ебәрергә түгел, ә мотлаҡ махсус формаға индерергә кәрәк буласаҡ, шунан һуң ғына ысын генеалогик эш башҡарыласаҡ.

***Революцияға тиклем булған ниндәй генә документты алып ҡарама, ысынлап та, унда мишәрҙәрҙең тарихы бөтөнләй икенсе. Ә бөгөнгө тарихты алып ҡараһаҡ, уҙған быуаттың 20-се йылдарында Татар Республикаһы барлыҡҡа килгәс, ошо мишәрҙәр татар милләтенә ҡушылып, татар тип яҙылғас, дөйөм идеология барлыҡҡа килә. Йәғни "Иван Грозный Ҡаҙанды алғас, беҙ ҡасып күсеп килеүселәр" тигән уйҙырма һеңдерелә. Ә ысынында улар Ҡаҙан губернаһынан түгел, Пенза, Түбәнге Новгород губерналарынан килгәндәр. Һәм күп осраҡта уларҙың килеп ултырыуы осоро XVIII быуаттың башы.***

**▶ "Без башҡортлар" проектында төрлө райондарҙа йәшәгән ырыуҙарҙың тарихтарын сығарып бараһығыҙ, күптән түгел мишәрҙәр тураһында белешмә донъя күрҙе. Кемдәр улар мишәр, кемдәр улар типтәр, һәм башҡа шундай бәхәстәр һәм тартҡылаштар һаман дауам итә. Тарихи документтарға нигеҙләнеп ҡарағанда, кемдәр улар мишәрҙәр?**

**Юлдаш Йосопов:** Элек мишәр халҡы булған, Башҡортостанда йәшәгән һәм үҙҙәрен татар тип иҫәпләгән халыҡтың 60-70 проценттан ашыуы мишәр булып сыға. Улар үҙҙәрен нисек атау төп мәсьәлә түгел, иң мөһиме - улар үҙҙәренең ата-бабаларын, кем икәнлектәрен белһен. Улар - мишәрҙәр, хәрби ҡатлам. Юҡҡа ғына башҡорт-мишәр ғәскәре ойошторолмаған бит, бергә походтарҙа, сит ил походтарында, Салауат Юлаев ихтилалында, 1812 йылғы Ватан һуғышында бергә ҡатнашалар. Үкенескә күрә, беҙ Башҡортостан халыҡтарының ошо ҙур өлөшөнә, бәлки, етерлек иғтибар ҙа бирмәйбеҙҙер. Ни өсөндөр уларҙы тулыһынса татарҙарға биреп ҡуйғанбыҙ.

**Азат Ярмуллин:** Революцияға тиклем булған ниндәй генә документты алып ҡарама, ысынлап та, унда мишәрҙәрҙең тарихы бөтөнләй икенсе. Ә бөгөнгө тарихты алып ҡараһаҡ, уҙған быуаттың 20-се йылдарында Татар Республикаһы барлыҡҡа килгәс, ошо мишәрҙәр татар милләтенә ҡушылып, татар тип яҙылғас, дөйөм идеология барлыҡҡа килә. Йәғни "Иван Грозный Ҡаҙанды алғас, беҙ ҡасып күсеп килеүселәр" тигән уйҙырма һеңдерелә. Ә ысынында улар Ҡаҙан губернаһынан түгел, Пенза, Түбәнге Новгород губерналарынан килгәндәр. Һәм күп осраҡта уларҙың килеп ултырыуы осоро XVIII быуаттың башы. XIX быуат аҙағында - XX быуат башында мишәрҙәрҙең башҡорттар менән бергә хеҙмәт итеүе, башҡорт ерендә ултырыуы ныҡ көслө тәьҫир иткән, сөнки Брокгауз һәм Ефрон энциклопедияһында мишәрҙәр тураһында былай тип яҙыла: "Мишәрҙәр (Башҡортостан мишәрҙәре) - улар башҡортса кейенә (төньяҡ-көнбайыш башҡорттары күҙ уңында тотола)" һәм ысынлап та, милли кейемдәрен ҡараһаҡ та шулай.

Ул ғына ла түгел, 1917 йылда башҡорт милли хәрәкәте барлыҡҡа килгән һәм 1918 йылда "Башҡорт" гәзитендә мишәрҙәргә "Башҡортостандың мишәр баласы" псевдонимы аҫтында мөрәжәғәт иткән авторҙың мәҡәләһе донъя күргән. Ана шунда мишәрҙәрҙең позицияһын бик асыҡ яҙып һалғандар: был осорҙа беҙ башҡорттар менән бергә булырға һәм Яңы Башҡортостан өсөн көрәшергә тейешбеҙ. Ысынлап та, мишәрҙәр, бигерәк тә мишәр офицерҙары, башҡорт ғәскәрендә әүҙем йөрөгән һәм башҡорт милли хәрәкәтенең әүҙем лидерҙарының береһе булған. Атап әйткәндә, Усман һәм Хәлит Терегуловтар. Улар ошо башҡорт полктарын төҙөүҙә ҡатнашҡан. Был идеяға Башҡортостан мишәрҙәре генә түгел, Ҡаҙан губернаһындағы мишәрҙәр ҙә тоғро булған. Мәҫәлән, Иҫке Әлмәт ауылынан Хәлил Әлишев тигән офицер 1918 йылда Башҡорт армияһына килеп хеҙмәт иткән. Артабан инде ошо хәрәкәттә аҙағына тиклем йөрөгән. Әбдрәшит Бикбаувты алып ҡарайыҡ - ул бөгөнгө Ульяновск өлкәһенән (элекке Сембер губернаһы), Иҫке Зеленовка тигән ҙур ғына мишәр ауылдарының береһенән. Ул шулай уҡ 1918 йылда Башҡорт армияһына хеҙмәткә алына, артабан инде Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһенә әүерелә. Хатта ошо хәрби мәсьәләләр буйынса килешеүҙәрҙә ҡатнаша һәм 1919 йылда большевиктар менән килешеү төҙөгәндә ул да ҡултамғаһын ҡуя. Килешеү төҙөлгәндән һуң 10 көн үткәс, Башҡортостан Республикаһының вәкиллеге төҙөлә һәм Абдулла Әҙеһәмов менән Әбдрәшит Бикбаув вәкил була.

Бына шундай ул мишәрҙәр. Беҙ тарихта ниндәйҙер сик үткәргәнбеҙ ҙә, мишәрҙәрҙе Ҡаҙан ҡарамағына ҡалдырғанбыҙ ҙа ҡуйғанбыҙ. Был белешмә - беренсеһе һәм киләсәктә "Башҡортостан мишәрҙәре" тигән хеҙмәттәр булырға тейеш тип уйлайым. Был күршеләргә ҡарата йүнәлтелгән сәйәси эш тип ҡарарға ярамай, был - тарихи сығанаҡтар нигеҙендә дөрөҫлөктө тергеҙеү генә. Һәр кем үҙенең дөрөҫ тарихын белергә хоҡуҡлы. Был йәһәттән Әнүәр Әсфәндиәровтың китаптарын миҫал итеп килтерергә була: Мишәрҙәр XVIII быуатта килгәндәр, килешеү төҙөп, ошо ерҙәргә ултырғандар һәм барыһы ла архив документтары менән раҫланған.

**▶ Башҡорт тарихы йылында үтмәһә лә, башҡорттар өсөн тағы бер мөһим булып торған мәсьәлә бар - ул да булһа Өфө ҡалаһының йәше һәм шуға бәйле Өфө-2 ҡаласығының яҙмышы. Әлеге ваҡытта федераль кимәлдә Өфө ҡалаһының 450 йыллығын билдәләү тураһында ҡарар бар, әммә беҙ бит инде уның Өфө ҡәлғәһенең йәше икәнен беләбеҙ. Ошо темаға ла асыҡлыҡ индереп үтәйек әле.**

**Азат Ярмуллин:** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының былтыр декабрҙә үткән йомғаҡлау ултырышында Өфө ҡалаһының юбилейы айҡанлы Башҡорт ҡалаһы Өфө-2 ҡаласығының музейын булдырыу мәсьәләне ҡабул ителгән ҡарарға индерелде. Бында бер нәмәне әйтергә кәрәк: бәлки, мәсьәләне улайтып ҡәтғи рәүештә ҡуйырға ла кәрәкмәйҙер. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһының юбилейы буласаҡ, Өфө ҡалаһының тарихы бер арауыҡта билдәләнә, ә инде Алла бойорһа, ошо юбилей айҡанлы музей эшләй алһаҡ, барлыҡ табылған ҡыҙылма ҡомартҡылар бер урынға тупланыр, бай туристик үҙәк булдырылһа, унда килеүселәр Өфөнөң 1574 йылға тиклем ниндәй тарихы булғанын үҙҙәре күрһә, барлыҡ һорауҙар үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ һәм был беҙҙең өсөн ҙур ҡаҙаныш буласаҡ. Ғәмәлдә, бында төп мәсьәлә һандарҙа йәки йылдарҙа түгел, ә ошо мөмкинлекте нисек файҙаланыуыбыҙҙа..

**Юлдаш Йосопов:** Археологик күҙлектән ҡарағанда, Өфө-2 ҡаласығының әһәмиәте, әлбиттә, ҙур, әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, дөйөм алғанда археологияға ҡалдыҡ принцибы буйынса ҡарау бар. Археология ул бит беҙҙең матди яҡтан тотоп ҡарай торған мәҙәниәтебеҙ, халыҡ-ара кимәлгә лә тап археология сығара. Археологик башҡорт мәҙәниәте тигән төшөнсә Нияз Мәжитов тарафынан индерелгән, ләкин әлегәсә тулыландырылмаған. Ғәмәлдә, мәҙәниәттәрҙең бер ни тиклемендә шул уҡ башҡорт мәҙәниәте сағылыш таба. Мәҫәлән, ҡараяҡуп мәҙәниәте. Археологтарҙың күбеһе уны мадьярҙар менән бәйләй. Әммә шул ваҡыттағы керамиканы ҡараһаң, уларға башҡорт тамғалары төшөрөлгән.

Мин Өфөгә 450 йыл тиеүҙәре менән килешәм, ул барыбер тарихи ваҡиға һәм Өфө ошо ҡәлғә төҙөлөшөнән үҙенең исемен ала. Әммә был беҙгә үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы белергә, өйрәнергә, үҙебеҙҙең тарихи мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап ҡалырға мөмкинлек аса.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Тарих тураһында һөйләшә башлаһаң, уны бер әңгәмәлә генә сағылдырып бөтөү мөмкин түгел. Һүҙ артынан һүҙ сығып, бер тема киңәйә бара, киңәйә бара, үткәндәрҙән бөгөнгөгә килеп тоташа. Хәйер, бай тарихлы, бай үткәнле, зат-ырыулы башҡортбоҙ бит. Башҡорт тарихы йылы уңайынан тарихҡа ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт итербеҙ, тарихсылар менән тағы ла осрашырбыҙ әле. Иң мөһиме - милләтте тупларлыҡ, берләштерерлек эштәре, проекттары, әйтер һүҙҙәре генә булһын. Йыл бит яңы башланып ҡына тора...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Минең уйымса, Ахунйәновты бик ныҡ борсоған нәмә, бәлки, 20-се мәктәп кенә түгел, ә киләсәктә ошо мәктәп өлгөһөндә баш ҡалала һәм башҡа урындарҙа милли мәктәптәр асылыу ихтималы булғандыр.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЕҪТӘР ДАУАЛАЙ ҘА...

■ Япония ғалимдары ҡайһы бер еҫтәрҙең кеше сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауын, хатта ҡандың химик составын үҙгәртергә һәләтле булыуын раҫлаған. Мәҫәлән, стресс ваҡытында үҙенә оҡшаған эфир майының еҫе көсөргәнештән арындыра, тынысландыра, депрессиянан ҡотҡара. Бер төркөм ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, лимон, манго, ала миләүшә еҫе тап ошо сифаттарға эйә.

■ Америка ғалимдары диеталар, ябығыу темаһына яңы тикшеренеүҙәр уҙғарған. Һомғол буй-һын тураһында хыялланғанда рациондан сәйҙе тулыһынса алып ташларға кәрәк, ти улар. Сәй сәләмәтлеккә зыян килтерә алмай, әммә йыш ҡына сәй эсеү ғәҙәте бөтөн тырышлыҡты юҡҡа сығара. Етмәһә, сәйгә шәкәр һалып эсеү ғәҙәте зыянлы. Бер сынаяҡ сәйгә 1-2 балғалаҡ шәкәр һалаһығыҙ икән, был организмға кәрәкле уртаса калорияларҙың өстән бер өлөшөн тәшкил итәсәк. Шулай итеп, көн һайын биш сынаяҡ татлы сәй эсәһегеҙ икән, йылына бер килограмм артыҡ ауырлыҡ йыяһығыҙ. Был сәйҙән генә, ә уға ҡушып тәмтом да ашағанда, хәл тағы ла ҡатмарлаша. Шуға ла ғалимдар сәйгә ҡушып бер нәмә лә ашамаҫҡа кәңәш итә.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профилактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Органик сүп-сарҙы өйҙә оҙаҡ һаҡлау сәләмәтлек өсөн зарарлы, тип иҫкәртә Берлиндың Инфекциялы сирҙәр һәм пневмология клиникаһы табиптары. Сүп-сар тарҡалған саҡта барлыҡҡа килгән бәшмәктәр тәьҫире һөҙөмтәһендә тире һәм тын юлы сирҙәре барлыҡҡа килеүе ихтимал. Хатта сүп биҙрәһенең ҡапҡасын асҡан мәлдә лә бәшмәк спораһы осоп, үпкәгә зыян килтереүе мөмкин. Бәшмәктәр аллергия, астма һәм лихорадка сирҙәренең сәбәпсеһе була ала. Шуға ла аш-һыу бүлмәһендәге сүп-сар һауытын көн һайын түгеп, йыуып тороу яҡшыраҡ.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕМ

# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## милли рухиәт үҙәге



**1970 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡала балаларын башҡорт телендә уҡытҡан тәүге мәктәп асылыуы оло мәҙәни һәм сәйәси ваҡиға булараҡ ҡабул ителде.**

Ул йылдарҙа Өфөлә бер генә башҡорт милли мәктәбе лә юҡ ине (Октябрь революцияһынан һуң илле йыл - ярты быуат ваҡыт үтһә лә). Бындай хәл менән килешмәгән башҡорт зыялылары ошолай фекер йөрөттө: тик башҡорт мәктәптәре асып һәм унда фән нигеҙҙәрен башҡорт телендә уҡытып ҡына башҡорт телен, милли аңды һәм милләтте һаҡлап ҡалып була. "Ярым үлек хәлендәге телде тергеҙеү, мәрткә киткән милли рухты уятыу бурысы" тора ине ул осорҙа уйлы-ғәмле башҡорт зыялылары алдында (М.Ямалетдиновтан). Был - беренсенән. Икенсенән, баш ҡалала беренсе башҡорт мәктәбе асылыу факты - ул дәүләт һәм партия органдарының милли сәйәсәтте тупаҫ боҙоуына, милли мәктәптәр асыуға ҡамасаулауына ҡаршы протест та ине. Йәмәғәт эшмәкәре Иҙел Агишев һүҙҙәре менән әйткәндә, "20-се башҡорт мәктәбе ата-әсәләрҙең күмәк талабы, ҡыҫымы һәм баҫымы менән асылды". Өсөнсөнән, властар милли мәсьәләне нисек кенә боҙмаһын, ул йылдарҙа башҡорт милли рухы иҫән ине әле. Шулай булмаһа, баш ҡалала башҡорт мәктәбе асып та булмаҫ ине. Шағир Рәми Ғариповтың 1957 йылда донъя күргән "Туған тел" исемле әҫәре ошоға дәлил булып тора. Йәғни, мәктәп асыу өсөн ыңғай ерлек баш ҡала башҡорттары рухына тамырланған була. Башҡорт зыялыларының: "Тик башҡорт мәктәбе асып ҡына телде, милли аңды һәм милләтте һаҡлап ҡалып була", - тигән аңлатыуҙарын ата-әсәләрҙең күп өлөшө аңлап ҡабул итә. Был эште уңдырышлы тупраҡҡа төшкән орлоҡ менән сағыштырып булыр ине.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, баш ҡалала беренсе башҡорт мәктәбен асыу еңелдән булманы. Башҡорт зыялыларына ниндәй ҡаршылыҡтарҙы үтергә тура килде һуң? Иң тәүҙә мәктәп бинаһы тураһындағы мәсьәлә ҡиҫкен торҙо. Үҙ биналары булғанға тиклем дүрт йыл буйы башҡорт кластары рус мәктәптәре бинаһында өйҙәш булып ҡына эшләп килде, был дәрестәр махсус йыһазландырылмау ғына түгел, ә иң ҡараңғы һәм ташландыҡ хәлдәге бүлмәләрҙә үтә ине. Уҡыусылар контингенты мәсьәләһе лә еңелдән булманы. Сөнки бина талап итер өсөн кәм тигәндә 500-600 бала йыйырға кәрәк ине.

Мәктәпкә киләсәк балаларҙың ата-әсәләренең психологияһы мәсьәләһе шулай уҡ ифрат ҡырҡыу торҙо. Улар үҙҙәре рус мәктәбендә уҡыған, күптәре туған телен дә яҡшы белмәгән башҡорт милләтле кешеләр, һәм уларҙы балаларын башҡорт мәктәбенә уҡырға бирергә ризалатыу үҙе бер ауыр һәм сетерекле хәл булып сыҡты. Шуға күрә башҡорт зыялыларына бөтә Өфө буйлап фатирҙан-фатирға йөрөп, ата-әсәләрҙе өгөтләргә, мәктәптең кәрәклегенә һәм буласағына ышандырырға тура килде.

Ләкин иң яман ҡаршылыҡ һәм ауырлыҡ дәүләт һәм партия органдарының башҡорт мәктәбен асыуға ҡырҡа һәм асыҡтан-асыҡ ҡаршылыҡ күрһәтеүе сәбәпле тыуҙырылды. Мәктәпте ойоштороусыларҙың береһе Иҙел Агишев үҙенең хәтирәләрендә шундай бер хәлде һөйләй: "Бер мәл мәктәпте асырға ҡаршы кешеләрҙең береһе булған Өфө ҡала партия комитетының идеология секретары менән осраштым. Ул миңә шундай һорау бирҙе: "Иптәш Агишев, һин ысынлап та 500-600 бала йыя алыуығыҙға ышанаһыңмы?" Иҙел Агишев уға: "Һис шигем юҡ!"- тип яуап бирә..." "Милли рухиәт үҙәге" тигән китабымды яҙғанда ҡулыма бик ҡыҙыҡлы документ килеп эләкте. Был 1970 йылда мәктәп администрацияһының Совет районының мәғариф бүлегенә тапшырған ОШ-1 отчеты ине. Ул һәр уҡыу йылының башында - 5 сентябргә тапшырыла. "1 сентябрҙә 20-се мәктәптә нисә бала парта артына ултырҙы?" тигән пунктта 503 һаны тора. Тимәк, башҡорт зыялылары 1970 йылда 503 бала йыя алған!

1973 йылдың 1 июлендә быға тиклем баш ҡаланың 77-се урта мәктәбендә директор булып эшләп йөрөгән мине 20-се башҡорт мәктәбенең директоры итеп тәғәйенләнеләр. Мәктәптә һаман да ауырлыҡтар етерлек ине әле. Ошо хаҡта хәтирәләремдә шулай яҙғанмын: "1974 йылдың ҡышҡы каникул ваҡытында мин, йәй файҙаланмаған отпускымды алып, ун көнгә үҙ йомошом менән Мәскәүгә киттем. Тап шул мәлдә мәктәпкә партия өлкә комитетының фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире Ғ.В. Сабитов килеп төшә. Мин бөгөн шуны ышаныслы итеп әйтә алам: әгәр ҙә беҙ йыйылып, беренсе секретарь М.З.Шакиров исеменә хат яҙмаһаҡ, Сабитов кеүек ҙур кешеләр беҙҙең мәктәпкә килмәгән булыр һәм һуңғараҡ республиканың өс меңдән ашыу мәктәбенең береһе тураһындағы мәсьәлә өлкә комитет секретары кимәленә күтәрелеп тикшерелмәгән булыр ине.

Мин Мәскәүҙән ҡайтыу менән өлкә комитетта 20-се мәктәп буйынса ҙур махсус кәңәшмә уҙғарылды. Кәңәшмәгә кемдәр генә саҡырылмаған! Идеология һәм йәш быуынды тәрбиәләүгә ниндәйҙер мөнәсәбәте булған барлыҡ республика һәм ҡала етәкселәрен күрергә мөмкин ине унда. Йыйылышты өлкә комитеттың идеология буйынса секретары асып ебәрҙе һәм уға йүнәлеш бирергә лә онотманы. Йыйылыш 20-се мәктәптең эшенә партия баһаһын биреүҙе һәм етәкселәренә был мәктәп менән артабан нисек эш итергә икәнен күрһәтеүҙе күҙ уңында тотҡандыр. Һуңынан йыйылыш барышы ошоно иҫбатланы ла инде. Өлкә комитет секретары үҙенең сығышында уларҙы 20-се мәктәптең эш йүнәлеше борсоуын белдерҙе: "Баш ҡалала быға тиклем Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, БДУ һәм 1-се һанлы башҡорт мәктәп-интернаты милләтселек үҙәге була торғайны, бына хәҙер уларға 20-се мәктәп өҫтәлде..." - тине ул. Ысынын ғына әйткәндә, Ахунйәновты милләтселек борсоманы, сөнки ул сәйәси күренеш республикала юҡ ине. Дөрөҫөн әйткәндә, Ахунйәновҡа үҙе астырырға теләмәгән мәктәпте асып ебәреү оҡшамай ине. Минең уйымса, Ахунйәновты бик ныҡ борсоған нәмә, бәлки, 20-се мәктәп кенә түгел, ә киләсәктә ошо мәктәп өлгөһөндә баш ҡалала һәм башҡа урындарҙа милли мәктәптәр асылыу ихтималы булғандыр. Ҡарағыҙ әле, борсолор-хәүефләнер урыны булған бит идеология секретарының! Ысынлап та, туған теленә, башҡорт халҡының киләсәгенә битараф булмаған ата-әсәләр 20-се мәктәп менән генә сикләнеп ҡалманы бит! Шуныһы йәл һәм ҡыҙғаныс: илдә милли мәктәптәр асыу кәрәклеген дәүләт органдары бик һуңлап аңланы...

Шулай итеп, Ахунйәнов йыйылышҡа йүнәлеш бирҙе лә артабан һүҙҙе өлкә комитеттың фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире Сабитовҡа бирҙе. Күптәр уның республикала билдәле "партияның тоғро һалдаты" икәнен

белә. Хужалар "кәрәк" тиһә, ул башын ҡаҡ ташҡа бәрергә әҙер бәндә. Сабитов 20-се мәктәптә бер генә көн, йәғни бер нисә сәғәт булып, уның эшендә бик күп "етешһеҙлектәр" тапҡан булып сыҡты. Мәҫәлән, мәктәптә В.И. Ленинға ҡарата ихтирам аҙ булыуын, тамашалар залында партия юлбашсыһының түгел, ә Салауат Юлаев портреты эленгәнен билдәләне; уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр коллективының тик башҡорт милләтле кешеләрҙән генә тороуы ла ҙур етешһеҙлек тип баһаланды; ата-әсәләр комитеты мәктәп администрацияһы эшенә ҡыҫыла, кәңәшмәләр, педсовет ултырыштары тик башҡорт телендә алып барыла, тигән гәйепләүҙәр булды; 20-се мәктәптә уҡытыусылар балаларҙы көсләп башҡорт теленә өйрәтә, тип тә өҫтәне.

Сабитовтан һуң Ахунйәнов мәғариф министры Йыһаншинды торғоҙҙо. Ул саҡта "Директор белешмәһе" тигән йыйынтыҡ була торғайны, Сабир Шәйәхмәт улы ҡулына шуны тотоп алғайны. Министр Ахунйәнов яһаған иҫкәртеүҙәргә әллә ни иғтибар итмәй, Белешмәнән мәктәптәге ата-әсәләр комитетының хоҡуҡтарына һәм бурыстарына ҡағылған урындарҙы уҡып сыҡты. Уның сығышы "хужаны" бик ҡәнәғәтләндермәне, сөнки ул ата-әсәләр комитетының мәктәп администрацияһы эшенә ҡыҫылып йөрөргә хоҡуғы бармы, юҡмы, тигән һорауға яуап көтә ине. Ә положениены төҙөүсе чиновниктар был турала яҙырға онотҡан. Мин бында бер нәмәне аңлатып китергә бурыслымындыр. Ата-әсәләр комитетының администрация эшенә ҡыҫылып йөрөүе, тигән һүҙ аҫтында әлеге тикшереүселәр беҙҙең ата-әсәләр комитетының М.Шакиров исеменә яҙылған хатын күҙ алдында тота ине. Ысынында, мәктәптең ата-әсәләре бер ваҡытта ла администрация эшенә ҡыҫылып йөрөмәне. Ләкин башҡа мәктәптәрҙән айырмалы, мәктәптең матди базаһын нығытыуға, уҡыу-тәрбиә эшенең кимәлен күтәреүгә бик күп көс һалды...

Министр сығышынан һуң һүҙ миңә бирелде. Сығышымда мин Сабитов килтергән миҫалдарҙы ҡәтғи рәүештә инҡар иттем. Беренсенән, тинем, тамаша залында Салауат Юлаев портреты тора икән, уның сәбәбе шунда: СССР Фәндәр академияһы ҡарары буйынса, 1973-1975 йылдарҙа бөтә илдә 1773-1975 йылдарҙағы Е.Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышының 200 йыллығы билдәләнә. 1974 йылдың ғинуарында ошондай сара беҙҙең мәктәптә лә үтте, һәм кисәне йыһазландырыу өсөн Салауат Юлаев портреты элинде. Икенсенән, 20-се мәктәптә балаларҙы башҡорт теленә көсләп өйрәтәләр, тигән фекер яңғыраны. Нисек уҡытыусы баланы туған телгә көсләп өйрәтә ала? Минең сығышым йыйылышта ҡатнашыусыларҙы нисек кенә ышандырырлыҡ һәм дәлилле булмаһын, Ахунйәнов барыбер үҙенсә һығымта яһаны: 20-се мәктәптең эш йүнәлеше дөрөҫ түгел, уны төҙәтергә кәрәк. Тупаҫ итеп "Ни эшләп үҙегеҙҙе тыңламаған директорҙы эштә тотаһығыҙ?" тип министрҙы ла киҫәтте (йәнәһе, министр менән кәңәшләшмәйенсә, М.Шакировҡа инергә маташҡанды күҙҙә тотто).

Ошоноң менән өлкә комитетындағы йыйылыш тамам булды. Һуңынан Ғ.Сабитов мине үҙенең кабинетына алып инде. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ, тигәндәй, ул 20-се мәктәптең эш йүнәлешен төҙәтергә шунда уҡ тотонорға булды, ахырыһы. Ул уратып-суратып торманы, 20-се мәктәптә башҡорт синыфтары менән бер рәттән башланғыс рус синыфтары асырға тәҡдим итте. Мин ҡырҡа ҡаршы сыҡтым. Түбәндәге дәлилдәр килтерҙем: беренсенән, рус кластары өсөн түгел, әле уҡып йөрөгән башҡорт синыфтары өсөн мәктәптә уҡыу бүлмәләре етешмәй, ике синыф коридорҙарҙа таҡтанан ғына бүленгән кабинеттарҙа уҡый. "20-се мәктәпте мин асмағанмын (мин унда икенсе директор булып килдем) һәм мин япмаясаҡмын!" - тип тә өҫтәп ҡуйҙым. Беҙ уның менән шул рәүешле айырылыштыҡ. Ошонан һуң да алты йылдан ашыу директор булып эшләнем әле. Өлкә комитет башҡаса мине лә, мәктәпте лә борсоманы...

Ләкин өлкә комитеттың башҡорт мәктәбенә ҡаршы мөнәсәбәтен аңлап алған Совет район комитеты, бигерәк тә уның идеология буйынса секретары Галина Рюмина менән эшләүе ифрат ауыр булды. Эшләй башлауымдың тәүге көндәрендә үк уның менән бәрелешергә тура килде. Беҙҙең мәктәп тирәһендәге балалар күршеләге 39-сы мәктәпкә уҡырға йөрөй ине. Уның етәкселеге беҙҙең мәктәп бинаһында 39-сы мәктәп балалары өсөн клуб ойоштороға тәҡдим иткән. Рюмина уларҙың тәҡдиме менән миңә килде. Был фекер аҡыллы кеше башына һыйырлыҡ түгел! Мин ҡәтғи рәүештә ҡаршы сыҡтым. Артабан ныҡышмаһа ла, ҡунаҡҡа минең һүҙҙәр оҡшаманы. Күпмелер ваҡыттан һуң минең урынбаҫарым икенсе урынға эшкә күсергә булды. Быны ишетеп ҡалған Рюмина миңә урынбаҫар итеп 23-сө мәктәптән бер уҡытыусыны тәҡдим итте. Мин тағы ризалашманым. Ләкин ул үҙ һүҙен өҫкә сығарырға тырышты, һәм оҙаҡламай район мәғариф бүлегендә миңә яңы урынбаҫар тәғәйенләү тураһында бойороҡ әҙерләнә башлауы ишетелде. Ул саҡта өлкә комитеттың фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире урынбаҫары Ә.М. Аҙнабаевҡа шылтыраттым. Уның ярҙамы менән генә Рюмина тағы сигенергә мәжбүр булды. Бер нисә көндән һуң ул мине үҙенә саҡыртып, бик ҡаты әрләне. "Беҙгә һинең менән эшләүе ауыр буласаҡ", - тине ул. Ысынлап та, был районда директор булып эшләү көндән-көн ауырлаша барҙы.

Уҡыусыларҙа, был кеше ни өсөн ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт элек булған хәлдәрҙе тәфсирләп һөйләй икән, тигән һорау тыуыуы мөмкин. Әлбиттә, Ахунйәнов, Сабитов, Рюмина, Шерстобитов, Байтурина кеүек кешеләрҙе хурлар өсөн яҙылманы үрҙә әйтелгәндәр. Яҙыуымдың төп маҡсаты шунда: ниндәй ауырлыҡтар менән башҡорт мәктәптәре асылыуын күрһәтергә тырыштым. Әммә халыҡ бөгөн башҡорт телен һаҡлап ҡалыу өсөн бөтә көсөн һалған кешеләрҙе лә онотмаһа, был изге эшкә аяҡ салыусыларҙы ла исемләп белһә, бынан бер зыян да булмаҫтыр.

Әшулай ҙа кемдәр улар мәктәпте ойоштороусылар? Был һорауға яуапты: "Улар - башҡорт зыялылары", - тип кенә лә яуап биреп була. Ләкин уларҙы ла ойоштороға кәрәк бит әле. Шулай ҙа был һорауға яуапты мин Иҙел Агишевтан башлар инем. Халҡы өсөн янып йәшәгән уҙаман, милли сәйәсәтте тәрән аңлаған, ҡыйыу, сағыу шәхес ине ул. Өҫтәп ҡуйыйым, бер үҙе генә булды, бер кем дә уны алдына алғанынан туҡтата алманы. Ул үҙе тирәһендә Мөхәмәт Искужин, Рәми Ғарипов, Әмир Сиражетдинов, Хәниф Вәлиев һымаҡ үҙе кеүек ҡыйыу шәхестәрҙе туплай алды. Мәктәп асыуҙы ойоштороусылар араһында Диҡҡәт Бураҡаев, Әкрәм Бейеш, Шәрифйән Ишемов, Ким Әхмәтйәнов, Нияз Мәжитов, З.Ишмөхәмәтов, Әнүр Вәхитов, Зиннур Ураҡсин, Вәхит Иҫәнғолов ише оло ғалимдарыбыҙ, Рәшит Солтангәрәев, Рәми Ғарипов, Булат Солтанов, Йыһат Солтанов кеүек яҙыусылар ҙа булды.

Иҙел Агишев һәм уның арҡаҙаштары баш ҡалала айырым башҡорт мәктәбе асыуҙы юллауҙы, быныӊ өсөн дәүләт һәм партия органдары менән аяуһыҙ көрәште нығышылып алып бара. Мәктәпте астырыуҙа хәл иткән ике мөһим документ тураһында әйтеп үткем килә: республика етәкселеге исеменә яҙылған 142 ата-әсәнең ҡултамғаһы ҡуйылған хат һәм 1968 йылдың февралендә Иҙел Агишевтың КПСС Үҙәк Комитетының идеология бүлегенә яҙған хаты. Мәскәүгә яҙылған хат үтә уҫал тонда яҙыла, унда Өфөлә башҡорт мәктәбе асыуға ҡаршы төшкән кешеләрҙең фамилиялары килтерелә һәм мәктәпте асыуҙа ярҙам һорала. Иҙел Агишевҡа Мәскәүҙән яуап биргән кеше булмай. Күрәһең, хат Башҡортостан өлкә комитетына ебәрелгән булғандыр. Ләкин Мәскәүгә яҙған хат эҙһеҙ ҡалмай. 1970 йылда (был В.И. Лениндың 100 йыллыҡ юбилейы) ҡала һәм республика власттары ата-әсәләрҙең теләгән ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр була, ошо йылдың йәйендә Өфөнөң Достоевский урамында 20-се һанлы башҡорт мәктәбе асыла.

Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһының 50 йыллыҡ юбилей көндәрендә ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, рухи нығылыҡ күрһәткән бына ошо кешеләргә - мәктәпте ойоштороусыларға айырым рәхмәт әйтке килә. Мәктәпте беренсе көндән үк етәкләгән Туғаҙаҡ Йәһүҙинға, уның урынбаҫары Луиза Хәсәноваға, һуңынан оҙаҡ йылдар директор урынбаҫары булған Дилбәр Хоҙайбирҙинаға ил рәхмәте булһын. 1970 йылдарҙа үҙем директор булып эшләгән дәүерҙә беренсе башҡорт мәктәбенә арымай-талмай хеҙмәт иткән уҡытыусыларҙы һәм тәрбиәселәрҙе - В.Ураҡсина, Т.Ғәниева, Р.Фәхретдинова, З.Бикмәтова, Д.Ханнанова, Ф.Сөләймәнова, М.Арыҫланова, М.Мирғәлиева, С.Ишбулатова, Г.Ҡужина, М.Йосопова, М.Моратов, Ф.Закирйәнова, В.Йәнтүрина, Л.Ғибәҙәтова, М.Ислахова, Ф.Сәләхова, З.Моратова, К.Шамбазова, Э.Гагина, О.Брумовская, Л.Ғүмәрова, М.Исҡужин, Ф.Ғилманова, М.Вәлиева, Р.Мөхәмәтова, Т.Анискова, Ф.Бикбаева, Ғ.Байсурин, Г.Филиппова, Р.Саматова, И.Мырҙағәлиев, Н.Хәсәйенова В.Мартенс, В.Арефьев, М.Нурмөхәмәтов, Ғ.Асанова, З.Ҡотошева, А.Әхтәриев, Б.Билалова, С.Ғәйнетдинова, Б.Муллағолова, Б. Сафиуллина, С.Абдрахманова, Ғ.Абдрахманова, Ә.Илтенбаеваларҙы һағынып иҫкә алам. Башҡорт халҡының аҫыл балаларын үҙ туған телендә уҡытыу-тәрбиәләү буйынса бөйөк эш атҡарған ошо кешеләр алдында баш эйәм.

Әмәктәптең илле йыллыҡ эш һөҙөмтәләре тураһында йомғаҡлап әйтерлек фекерҙәр шул:

- 1970 йылда асылған баш ҡалалағы беренсе башҡорт мәктәбе башҡорт халҡының милли рухиәт үҙәгенә әйләнде. Мәктәпте ойоштороусы башҡорт зыялыларының ҡалала бары тик башҡорт мәктәбе асып ҡына телде, милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, милли аңды һәм милләтте һаҡлап алып ҡалып була, тигән фекерен раҫланы. Милләтте һаҡлауҙың башҡа юлы юҡ ине.

- Баш ҡалала асылған башҡорт мәктәптәре, рус мәктәптәре кеүек үк, балаларға заманса белем бирә алыуын раҫланы (1960-1970 йылдарҙа республикала милли мәктәптәр балаларға тәрән белем бирә алмай, тигән хәбәр киң таралғайны).

- 20-се мәктәп асылыуы ҡалала һәм районларҙа ошондай уҡ мәктәптәр барлыҡҡа килеүгә этәргес көс булды. Бөгөн баш ҡаланың ете районында берәр башҡорт мәктәбе эшләп килә (йөҙәр мең кеше йәшәгән районларҙа ни бары берәр генә мәктәп!) Уның миҫалында Өфөлә татар мәктәптәре һәм гимназиялары асылды.

- Ошондай мәктәптәр халкыбыҙҙы берләштерергә, туплауға ярҙам итә.

- Был мәктәптәрҙе тамамлаусылар йыл һайын милли интеллигенция рәтен тулыландырып тора. Был уҡыу йорттары - милли интеллигенция әҙерләү үҙәктәре.

**Марат ХАФИЗОВ,**
**Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһының 1973-1978 йылдарҙағы директоры.**

**Баҫмаға**
**Сәрүәр СУРИНА**
**әҙерләне.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЯУАПЛЫЛЫҠТЫ ҠАБУЛ ИТ

Һинең нимә теләйһең, шуны эшләргә хоҡуғың һәм иркең бар. Бер кем дә һинең өсөн һайлай алмай. Яратыусы (Аллаһы Тәғәлә) һиңә ихтыяр биргән. Интеллектуаль һәм физик һәләтең нимәгә булдыҡлы, шуны эшләй алаһың.

Һиңә хаталанырға, алдашырға, иларға, ҡысҡырырға, ялҡауланырға, асыуланырға, эгоист, тоғро, агрессив булырға, үпкәләргә, кире ҡағылырға, ашау, эсеү менән самаһыҙ мауығырға рөхсәт ителә; һиңә теләһә ҡайһы мәсьәлә буйынса үҙ фекереңде үҙгәртергә мөмкин. Ләкин ихтыярың был ғәмәлдәрҙең барыһында ла һин хаҡлы, тигәнде белдермәй. Һайлаған ғәмәлең хәҙерге Аңлау кимәлең юғарылығында ғына "дөрөҫ".

Үҙ шәхесеңә ҡарата намыҫлы булырға өйрәнмәйенсә һәм ғүмереңөсөн, үҙ талаптарыңды ҡәнәғәтләндереү өсөн тулы яуаплылыҡ алмайынса тороп, азатлыҡ яулай алмаясаҡһың. Һин һәр уйың, һүҙең, ҡарарың һәм ғәмәлең өсөн тулы яуаплылыҡ алырға тейешһең, юҡһа, һиңә улар өсөн мотлаҡ түләргә тура киләсәк. Һин өйрәнәсәкһең һәм үҙ ҡылыҡтарыңдың тәбиғәтенә һәм әҙемтәләренә ярашлы үҫәсәкһең.

Шуны иҫеңдә тот: һин бер ваҡытта ла бер нәмәне лә "насар" йәки "яҡшы", "дөрөҫ" йәки "яңылыш" эшләмәйһең. Тик "аҡыллы" йәки "аҡылһыҙ" ғына булыуың мөмкин. "Аҡылһыҙ" ҡылыҡтарҙан "аҡыллыһына" күскәндә был терминологияның әһәмиәтен нығыраҡ аңларһың, тип ышанайыҡ.

Нимә лә булһа эшләр алдынан үҙеңә түбәндәге һорауҙарҙы бир:

1) Был ҡылыҡ аҡыллы булырмы, әллә аҡылһыҙмы?

2) Ул минең төп талаптарымды ҡәнәғәтләндереүгә хеҙмәт итерме?

3) Ул миңә йәки башҡа берәйһенә зыян итерме?

4) Ул, мин аңлағанса, Ғаләм закондары менән гармонияламы?

5) Мин түләргә тейешле дөйөм хаҡ күпме?

6) Мин был хаҡты түләргә һәм әҙемтәләрен ҡабул итергә теләйемме һәм шуға һәләтлемемме?

Был һорауҙарҙы биреп, һин үҙ тормошоңа һәм эшмәкәрлегеңә тулы һәм аңлы контроль булдыраһың. Улар һиңә үҙ ҡылыҡтарың өсөн, беренсе сиратта, яуаплы булыуыңды аңлауға нигеҙләнгән яңы Аңлау төҙөргә ярҙам итә. Ысынлап та, үҙ ҡылыҡтарыңдың емештәрен иң элек үҙең татыйһың бит.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 1 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Отступать нельзя". К 90-летию Бориса Ельцина. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 2 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Цена Освобождения". К 100-летию Юрия Озерова. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Зятья Гюргюри". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 3 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.25, 3.05 Модный приговор. [6+]
12.10, 0.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.10 Д/ф Премьера. "Блокада. Дети". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Белый пароход".[12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 4 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Иосиф Бродский. Часть речи". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо Р." (Рига).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45, 4.15 Д/ф "Вижу сны..." [12+]**
**0.00 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 5 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 3.45 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.35 Давай поженимся! [16+]
16.00, 5.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.30 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию. Алина Загитова / Евгения Медведева. [0+]
0.30 Х/ф Премьера. "Ван Гоги". [16+]
2.25 Х/ф "Соглядатай". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Юморина. [16+]
23.50 Х/ф "Мамочка моя". [12+]
3.20 Х/ф "Любовь на два полюса". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Непобедимая и легендарная. История Красной Армии". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.15 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Тормош. [12+]**
**6.00 "Бай". [12+]**

## 6 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Вера Глаголева. Несломанный свет". [12+]
11.30, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.05 "Честное слово".
14.35 Лев Лещенко. Концерт в день рождения. [12+]
16.35 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.05 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
19.45 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию. Алина Загитова / Евгения Медведева. Прямой эфир.
21.00 Время.
21.20 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию. Алина Загитова / Евгения Медведева. [0+]
23.20 Х/ф Премьера. "Бледный конь". [16+]
1.35 Д/ф "Михаил Жванецкий. "Вам помочь или не мешать?" [16+]
2.20 Модный приговор. [6+]
3.10 Давай поженимся! [16+]
3.50 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Тест. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.20 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Т/с "Большие надежды". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Любовь без памяти". [12+]
1.00 Х/ф "Разорванные нити". [12+]
4.14 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30, 14.30 "Дарю песню". [12+]**
**13.00 Финал этапа Кубка мира по гигантскому слалому.**
**16.30 Колесо времени. [12+]**
**17.30 Концерт "Презентация Медиа Центра ГКЗ+". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.30 Спектакль "Крах и отчаяние". [12+]**
**4.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 7 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Личные обстоятельства". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.20 Юбилейный концерт Игоря Матвиенко. [12+]
16.00 Премьера. "Я почти знаменит". [12+]
17.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Кубок чемпионов. [16+]
19.20 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию. Алина Загитова / Евгения Медведева. Прямой эфир.
21.00 Время.
21.50 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию. Алина Загитова / Евгения Медведева. [0+]
23.50 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.45 Д/ф "Как Хрущёв покорял Америку". [12+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20, 1.30 Х/ф "Срочно ищу мужа". [12+]
6.00, 3.10 Х/ф "Белое платье". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.20 Т/с "Большие надежды". [12+]
17.30 Танцы со звездами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45, 4.15 Автограф. [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 "Дорога к храму". [0+]**
**13.00 Финал этапа Кубка мира по гигантскому слалому.**
**14.30 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). КХЛ.**
**19.00 "Радуга рулит".**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Т/с "25-й час". [16+]**
**2.00 Спектакль "Дама без камелий". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (19) дүшәмбе | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 16:22 | 17:52 | 19:22 |
| 2 (20 шишәмбе | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 16:24 | 17:54 | 19:24 |
| 3 (21) шаршамбы | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 4 (22) кесе йома | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 16:28 | 17:58 | 19:28 |
| 5 (23) йома | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 16:30 | 18:00 | 19:30 |
| 6 (24) шәмбе | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 16:32 | 18:02 | 19:32 |
| 7 (25) йәкшәмбе | 7:26 | 8:56 | 13:30 | 16:34 | 18:04 | 19:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Күҙ алдыбыҙға килтереп ҡарайыҡ әле: хәҙерге артистарыбыҙҙың ана шул ҡиәфәтен бынан йөҙ (хатта илле!) йыл элек Ислам динен тотоп йәшәгән олатай-инәйҙәребеҙ күрһә, нисек ҡабул итерҙәр ине икән?*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ЯРЫМШӘРӘЛӘР...

## йәнәшәбеҙҙә бит!



**Ошо арала Фәлән рәссамдың бер һүрәте күптәрҙе ҡуҙғытып алды. Нәҡ тә ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡан һымаҡ. Әлеге рәссам ишараты һәм уның фекерҙәштәре "сәнғәт төрө" тип һанаған был һүрәттә төшөрөлгән өс ҡыҙҙың "ярымшәрә" булыуы күптәрҙең йөнен көйҙөрҙө.**

Ошо һүрәтте күргәс, башҡорт кешеһе булараҡ, мин дә, әлбиттә, ҡыйынһындым. Шул уҡ ваҡытта әллә ни иҫем китеп тә барманы. Ни өсөн? Сөнки яҡташтарыбыҙҙа ниндәй генә кире тойғо уятмаһын, был - беҙҙең милләт менталитетынан бөтөнләйгә алыҫ торған рәссәм ишаратының аңында тыуған фантазия. Уны ла, интернет селтәренә инмәйенсә, ҡапыл да күрә һалып булмай...

Ә ысын "ярымшәрә"ләр иһә, реаль тормошобоҙҙа, сәхнәләребеҙҙә йырлап һәм бейеп йөрөгәндәр араһында! Шундай һылыу йөҙлө, матур буй-һынлы бәғзе бер ҡыҙҙарыбыҙҙың, милләт атрибутикаһын хәтерләткән сепрәк киҫәге менән үҙҙәренең тән гүзәллектәренең бер аҙ өлөшөн генә ҡаплай биреп, бөтә халыҡ алдында сығыш яһауҙарына күнегеп киткәнбеҙ түгелме, йәмәғәт? Күҙ алдыбыҙға килтереп ҡарайыҡ әле: хәҙерге артистарыбыҙҙың ана шул ҡиәфәтен бынан йөҙ (хатта илле!) йыл элек Ислам динен тотоп йәшәгән олатай-инәйҙәребеҙ күрһә, нисек ҡабул итерҙәр ине икән? Һәр хәлдә, уларҙы алҡышлап тамаша ҡылмаҫтарына иманым камил. Әлеге интернеттағы һүрәткә ҡарата үҙҙәренең ризаһыҙлығын белдергән зыялыларыбыҙҙан да кәм булмаҫ ине шәйт. Беҙ ана шул йәнәшәбеҙҙәге яланғас бот-саттарын күрһәтеп йөрөгән бәғзе бер гүзәлдәребеҙҙе бөтөнләйгә тиерлек күрмәмешкә һалышабыҙ. Ә бит улар - беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ... Башҡорт ҡыҙҙары! Интернетта ғына түгел, ә һәр кемебеҙҙең өйөндә булған уҫлаптай телевизор экрандарында сығыш яһай улар. Бына нимә өсөн мин ныҡ борсолам. "Милләтебеҙҙең, ҡыҙҙарыбыҙҙың ғорурлығы", тип саң ҡағыусылар бына ҡайҙа иғтибар итергә тейеш...

Әйткәндәй, ир-егеттәребеҙ сисенмәне. Афариндар, тип әйтке килә уларға. Урамда, башҡа йәмәғәт урындарында, сәхнәлә лә ирҙәребеҙ һәр саҡ кейемле. Хатта әлеге картинаға төшөрөлгән егеттәребеҙ ҙә, хәрби тел менән әйтмешләй, "в полной форме"! Уйланырға урын бар, хөрмәтле милләттәштәрем, гүзәлдәрҙән-гүзәл нәфис заттар...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ИҢ МАТУР ҺҮҘ*

# ӨМӨТ



**Өмөт - башҡорт теленең иң матур һүҙҙәренең береһе. Уны беҙ ниндәйҙер яҡшы ваҡиға көткән күркәм күңел торошона ҡарата әйтәбеҙ.**

Өмөтләнеү, көтөү, ышаныу - кеше тормошондағы иң көслө тойғо. Уның ҡеүәтле булыуын ауырып түшәккә ятҡан сирле миҫалынан да күрергә мөмкин. Күп осраҡта кешене һауығыуға өмөтө аяҡҡа баҫтыра. Заман медицинаһы ни тиклем алға киткән, юғары технологиялы булһа ла, был өлкә хеҙмәткәрҙәре бының шулай икәнен яҡшы белә. Өмөттө беҙгә ауырлыҡтарҙы, ҡаршылыҡтарҙы, һынауҙарҙы лайыҡлы үтергә, еңергә булышлыҡ иткән ҡеүәтле рухи инструмент тип атарға ла мөмкин.

Өмөт менән йәшәгән кешеләр өмөтһеҙҙәрҙән көслөлөгө, ихласлығы, асыҡлығы һәм оптимизмы менән айырылып тора. Эйе, һәр кеше үҙенең тормошона юғары маҡсаттар ҡуйып, уның бойомға ашыуына ышанып, өмөтләнеп йәшәргә тейеш. Был тойғо булмаһа, билдәле инде, тормош мәғәнәһе юғала, һөҙөмтәлә кеше төшөнкөлөккә бирелә. Әйҙәгеҙ, ошо матур башҡорт һүҙенең көсөнә, тылсымына ышанып, үҙебеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың изге ниәттәре ғәмәлгә ашыуына өмөтләнеп йәшәйек. Мохтаждарға өмөт бүләк итәйек.

**Лена БАРЫЕВА.**

*ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА*

# КЕЙЕМ ҺӘМ КҮҢЕЛ ТОРОШО

**Психологтар ҙа, стилистар ҙа кешенең һөнәре, холҡо, ғәҙәттәре генә түгел, ә кейгән кейеме, уның төҫө лә күңел торошо хаҡында һөйләүен билдәләй һәм нисек итеп улар ярҙамында кәйефте күтәреп булыуы хаҡында байтаҡ асыш яһаған.**

**Сағыу төҫтәге кейем һайлағыҙ.** Ҡара төҫтәге кейем һәр ваҡытта ла төшөнкө кәйеф тураһында һөйләмәй, әлбиттә, әммә был уның тәүге билдәһе тип әйтергә урын бар. Кешенең күңелен матур төҫлө кейем ярҙамында күтәрергә була. Әгәр көс килеүен теләһәгеҙ, кейемдең сағыу төҫтәрҙәгеһен һайлағыҙ. Ғөмүмән, беҙ кәйефебеҙ ниндәй, шундай кейем кейәбеҙ һәм кейемебеҙ ниндәй, кәйефебеҙ ҙә шундай. Хәлебеҙ булмағанда беҙ төҫһөҙ кейенәбеҙ. Колористика һәм кәйефебеҙ араһындағы бәйләнеште психологтар бына нисек аңлата: ауыр хәлдә килгән клиенттар сағыу төҫлө ҡәләмдәрҙе бөтөнләй тиерлек файҙаланмай. Улар һоро, ҡара, көрән төҫтәргә өҫтөнлөк бирә. Был күренеш балаларға ла, ололарға ла хас.

**Ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.** Беҙгә, әлбиттә, төҫ кенә йоғонто яһамай. Йыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙар хәле булмаһа, сәсен башына өйә лә, резинка таға, салбар кейә, йәғни кейенеүгә, биҙәнеүгә эске ресурстарын сарыф иткеһе килмәй. Һөҙөмтәлә прическала ла, кейенеүҙә лә еңел ысулды һайлай.

**Кәйеф күтәрә торған әйберҙәр.** Һәр кем сибәр күренергә теләй, әммә бөтәһе лә матур була белмәй. Йыш ҡына ҡатын-ҡыҙ кәйефһеҙ булһа, кейенергә лә, биҙәнергә лә теләмәй. Был ҡылығы өсөн ул үҙен "кем өсөн", "ҡыҙыҡ түгел" тип аҡлай. Психологтар кәйефте күтәрер өсөн шулай кәңәш бирә: кейенеп-яһанып, матур кешеләр йыйылған урындарға, театрға, концертҡа барырға, тамашаға һуңлаған хәлдә лә биҙәнергә, иң яҡшы кейемде кейергә ҡуша. Бала менән урамға сыҡҡанда ла матур кейенергә тырышығыҙ. Бер кем өсөн дә түгел, үҙегеҙ өсөн, шул ваҡытта ғына ял иткәнегеҙҙе тойорһоғоҙ. Күптәр шуны аңлап етмәй: былар күңел торошон яҡшыртыу, ауыр ваҡытта үҙеңә ярҙам итеү өсөн файҙаланыла торған ресурстар.

**Өс яратҡан әйбер һайлағыҙ.** Төшөнкөлөккә бирелһәң, матур булып күренеү түгел, бер нәмәгә лә күңел төшмәй. Психологтар әйтеүенсә, велосипед уйлап сығарырға кәрәкмәй бында. Ҡыйын саҡта өс яратҡан кейемегеҙҙе кейегеҙ. Әгәр гардеробта ундайҙар юҡ икән, уларҙы билдәләү өсөн иң яҡшы ваҡыт. Уны нисек белергә? Ниндәй кейемегеҙҙе кейгән ваҡытта һеҙгә йылы һүҙ йәки комплимент әйтәләр? Ҡайһы кейемегеҙ һеҙгә килешә һәм кейгән ваҡытта күңелегеҙ күтәрелә? Бына шулар яратҡан кейем булырға тейеш.

Әйткәндәй, шкафты йыйыштырыу ҙа күңелһеҙлектән ҡотолорға ярҙам итә, сөнки илдәге, эштәге, шәхси тормоштағы хәлдән айырмалы, һеҙ быны тик үҙегеҙ генә контролдә тота һәм тәртипкә килтерә алаһығыҙ. Гардеробта үҙегеҙгә оҡшаған әйберҙәрҙе генә ҡалдырығыҙ. Кәйеф насар булғанда ғына һеҙгә нимә оҡшамағанын яҡшы аңлайһың. Ябыҡҡас йәки тулыланғас кейермен әле, тип, бер кейемегеҙҙе лә ҡалдырмағыҙ. Шопинг яратһағыҙ, матур кейем кейеп ҡарар өсөн генә булһа ла магазинға сығығыҙ. Әгәр сауҙа нөктәһендә йөрөргә яратмаһағыҙ, йөрөмәгеҙ. Бындай хәлдә бөтөнләй кәрәкмәгән әйбер һатып алыуығыҙ ихтимал. Магазинға сыҡҡанда һеҙгә кәңәш бирерҙәй, күңел ятҡан кешене лә бергә алып сығығыҙ. Ныҡ йәнегеҙ көйгән ваҡытта кире энергияны сығарыр өсөн ишекте ныҡ итеп ябыу ҙа ярҙам итә. Был осраҡта, бәлки, аҡса янсығығыҙҙы асырға ла тура килмәҫ...

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӨКӨРГӘН ТӨКӨРӨКТӨ...

## кире йотмайҙар

Кис уйлаған уйҙан иртән тапҡан аҡыл артыҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йәш ир үтеп барыусының үҙен башланғыс кластарҙа уҡытҡан уҡытыусыһы икәнен абайлап ҡала һәм уның янына килә.**

**- Һеҙ мине иҫләйһегеҙме? Мин һеҙҙең элекке уҡыусығыҙ.**

**- Эйе, һине өсөнсө класс уҡыусыһы, тип хәтерләйем... Ә әле нимә менән шөғөлләнәһең һуң?**

**- Мин уҡытам.**

**- Уҡытыусылыҡ эшен һайларға нимә мәжбүр итте һуң?**

**- Нимә түгел, ә кем. Һеҙ...**

**- Был һөнәр буйынса китергә нисек йоғонто яһаным һуң?**

**- Минең дә уҡыусыларым булыуын теләнем.**

**- Ундай теләкте уятырлыҡ мин һиңә нимә эшләнем?**

**- Һеҙ ысынлап та иҫләмәйһегеҙме? Хәтерегеҙгә төшөрөргә мөмкинме? Бер көндө минең класташым ҡулына ата-әсәһе бүләк иткән матур сәғәт тағып килде. Дәрес ваҡытында уны систе лә партаның ҡумтаһына һалып ҡуйҙы. Мин һәр ваҡыт ошондай сәғәтем булыуын теләгәйнем. Түҙмәнем, уны ул күрмәгәндә генә алдым да кеҫәмә һалдым. Тиҙҙән теге малай һеҙҙең янға килде лә илай-илай сәғәтен урлауҙары хаҡында әйтте. Һеҙ бөтә класты күҙегеҙҙән үткәрҙегеҙ ҙә: "Кем сәғәтте алды, эйәһенә кире бирегеҙ", - тинегеҙ.**

**Миңә ныҡ оят ине, әммә кире биргем килмәне, шулай итеп мин сәғәтте алғанымды йәшерҙем. Һеҙ ишекте эстән бикләнегеҙ, беҙгә стена янына теҙелергә ҡуштығыҙ: "Күҙегеҙҙе йомоғоҙ, мин кеҫәгеҙҙе тикшерергә тейешмен", - тип әйттегеҙ. Шул ваҡытта мин был ҡыҫҡа ғына ғүмеремдәге иң оят мәлде кисерҙем. Һеҙ сират буйлап, һәр бер уҡыусының кеҫәһен тикшереп килдегеҙ ҙә, минекенән сәғәтте алып, аҙаҡҡа тиклем тикшереүҙе дауам иттегеҙ. Аҙаҡ: "Балалар, барыһы ла яҡшы, урынығыҙға ултырығыҙ", - тинегеҙ. Сәғәтте эйәһенә бирҙегеҙ ҙә, был хаҡта башҡа бер кемгә лә, бер нәмә лә әйтмәнегеҙ.**

**Шулай итеп, һеҙ был көндө минең намыҫымды һәм күңелемде һаҡланығыҙ. Мине уғры, алдаҡсы, эшкинмәгән итеп күрһәтмәнегеҙ. Ғөмүмән, һеҙ был ваҡиға хаҡында бер ҡасан да иҫкә лә төшөрмәнегеҙ.**

**Ваҡыт үткәс кенә һеҙҙең ни өсөн шулай эшләгәнегеҙҙе аңланым. Һеҙ ысын уҡытыусы булараҡ, йәш, әле формалашып та бөтмәгән уҡыусыға тап төшөрөргә теләмәгәнһегеҙ. Мин шуның өсөн педагог булырға ҡарар иттем дә инде...**

**Бер аҙ тынлыҡтан һуң йәш уҡытыусы һорап ҡуя:**

**- Һеҙ бөгөн мине танынығыҙ, тимәк, әлеге ваҡиға ла иҫегеҙгә төшкәндер?**

**Ҡарт уҡытыусы шулай тип яуап бирә:**

**- Һеҙҙең кеҫәне мин дә йомоҡ күҙҙәр менән тикшергәйнем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21005

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 57/01